МАУК «Мелеузовская ЦБС»

Каранская библиотека



# Души прекрасные порывы



Каран 2018



***Автор - составитель:***

***библиотекарь Каранской библиотеки***
***Флюза Халитова***

*Для чего нужны нам сказки?*
*Что в них ищет человек?*
*Может быть, добро и ласку.*
*Может быть, вчерашний снег.*
*В сказке радость побеждает,*
*Сказка учит нас любить.*
*В сказке звери оживают,*
*Начинают говорить.*
*В сказке все бывает честно:*
*И начало и конец.*
*Покидать нам сказку жалко,*
*Как уютный милый дом.*
*Прочитайте сказки детям!*
*Научите их любить.*
*Может быть на этом свете*
*Станет легче людям жить.*

***Души прекрасные порывы [Текст] : дайджест : +6 / Каранская б-ка ; сост. Ф. Р. Халитова, Г. М. Семенова ; пер. М. М. Халитово. - Каран : Каранская б-ка, 2018. - 55 с.***

***Уважаемые земляки!***

***У вас в руках дайджест, в котором я хотела рассказать о нашей каранской детской писательнице Гульнур Мархамитдиновна Семеновой. Она пишет сказки для детей, которым посвятилавсю свою жизнь. Гульнур Мархамитдиновна тонко понимает детские сердца и души.***

***До выхода на пенсию, она долгие годы работала в детском садике «Росинка», преподавала башкирский язык. На каком-то этапе, она вдруг поняла, что книг для детей, на башкирском языке, слишком мало. И она начала писать, вкладывая свою любовь в эти сказки.***

***Гульнур Мархамитдиновна – талантливый педагог, трижды участвовала на конкурсах «Учитель года», занимала призовые места, охотно делилась своим богатым опытом, совершенствовала современные педагогические приемы, успевала активно сотрудничать в мелеузовской газете «Кунгак», в уфимской детской газете «Йэншишмэ», журнале «Тамаша». Именно там, впервые были напечатаны сказки «Матушка земля», «Волшебный клубок», «Айгуль и цыплята», «Разукрашенный столб». Эти детские произведения отражают видение мира глазами детей. Кому, как не ей, известен, понятен детский взгляд восприятия окружающего мира.***

***Предлагаю и вам, вместе с вашими детьми, насладиться добрыми сказками Гульнур Мархамитдиновны Семеновой.***



## *Семенова (Шарипова) Гульнур Мархамитдиновна*

Родилась 28 января 1958 года в деревне Апасово Мелеузовского района.

В родной деревне получает начальное образование.

По окончании Аптраковской средней школы, поступает учиться в Аксеновский сельскохозяйственный техникум Альшеевского района по специальности «Агрономия».

Свою трудовую деятельность начинает в 1979 году по специальности «Агрономия» в колхозе «Агидель».

После рождения второго ребенка решила связать свою дальнейшую деятельность с детьми и поступила в Кумертауское педагогическое училище по специальности «Дошкольное воспитание». По направлению поступила на работу воспитателем в детский сад №4 города Мелеуза.

Без отрыва от работы окончила филологический факультет БГПУ по специальности «Преподаватель башкирского языка и литературы». На высоком уровне начала свою преподавательскую деятельность Башкирского языка и литературы, совмещая работу в детском саду № 10 «Василек», №23 «Росинка», начала писать сказки и рассказы для детей.

Её произведения печатаются в местных газетах и журналах.

Имея продолжительный стаж работы в 2013 году присвоено звание «Ветеран труда». Находясь на заслуженном отдыхе, продолжает работать и вести свою творческую деятельность. Она и Федор Михайлович (муж) дали хорошее образовании своим трем детям, дочь продолжает педагогическую династию.

# Жизненный и творческий путь

1. **Амирова, А. Ҡатын - ҡыҙ - илһам, һөйөү, йәшәү сығанағы [Текст] / А. Амирова // Көнгәк. - 2013. - 7 март. - Б. 2.**

## Ҡатын - ҡыҙ - илһам, һөйөү, йәшәү сығанағы

*Йылы өләшеүсе әсә, нур бөркөүсе ҡатын*

Тышҡы матурлығы менән генә түгел, эске донъяһы менән күнелде арбаған Гөлнур Семенова хаҡында һүҙемде фәҡәт ошо һүҙҙәрҙән башлар инем. Мөләйем, һөймәлекле, ипле, итәғәтле ханымға күптәр тартыла, сөнки ул ихлас, эскерһеҙ, ябай, игелекле. Бөтә булмышы менән тормошто тыуған төйәген, кешеләрҙе ярата. Ғүмерен балалар менән эшләүгә бағышлаған, ижади, тәбиғәттән һәләтле шәхестәр ысынлап та башҡаларҙан ныҡ айырыла, күрер күҙгә күренмәҫ ниндәйҙер илаһи көскә эйә улар.

Гөлнур Мәрхәмитдин ҡыҙының донъяға ҡарашы үҙенсәлекле, фәлсәфәһи уйға һалырлыҡ. Апас ауылының күп балалы колхозсы ғаиләһендә тыуған ҡыҙ ергә ерегеп, бәләкәйҙән ҡул араһына инеп эшләп үҫә, колхоз баҫыүын да аҙ тапамай, ата-әсәһенең терәк-таянысы булырға тырыша. Аксен ауыл хужалығы техникумында агрономия өлкәһенөйрәнә, тыуған «Ағиҙел» колхозында хеҙмәт юлын башлай. Һайлаған һөнәре ҡатмарлы, ауыр булһа ла, сәмле, дәртле йәш ҡыҙ йөкмәтелгән бурыстарын яуаплы ҡарай, ваҡытында атҡара. Урман-тауҙар, йылға, яландарға һоҡланып туя алмай ул. Донъя, йәшәйеш төшөнсәләре серҙәрен белергә тырыша, хикәйәләрендә, әкиәттәрендә, сағылдыра, Артабан Гөлнур Семенова - Шәрипова яҙмышын балалар тәрбиәләүгә, туған башҡорт телен йәш быуынға өйрәтеүгә бағышлай.

Кумертау педагогия училищеһын, аҙаҡ М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетын тамамлай. Мәғәриф өлкөһендә эшләүенә 30 йылдан артыҡ. Уны ғәҙел, сабыр, тыныс тәрбиәсе, тынғыһыҙ, талантлы, оҫта укытыусы тип beләләр.

Намаҫлы, фиҙаҡәр хеҙмәте тиҫ тәләгән Маҡтау грамотаһы, Рәхмәт хаты менән баһаланған. Асыҡ дәрестәре, төрлө темаға арналған саралары сағыу, фәһемле, үҙен сәлекле. Район күләмендә генә түгел, республика буйынса ла

Гөлнур Мәрхәмитдин ҡыҙының эшен өлгө итеп күрһәтәләр. Һөнәренә мөкиббән бирелгән әүҙем педагог өс тапҡыр «Йыл уҡытыусыһы»

конкурсында ҡатнаша, призлы урын яулай. Һәр саҡ белемен камиллаштырған, заман менән бергә атлап, яңы ысулдарҙы үҙләштергән

Гөлнур Семенова башҡа тәрбиәсе, уҡытыусылар менән тәжрибә уртаҡлаша, йәш белгестәргә ярҙамлаша, дөрөҫ йүнәлеш бирергә тырыша. Әҙәбиәтте һөйөүсе ханымдың «Көнгәк» район гәзитендә йәш быуынға арналған ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс хикәйәләре баҫыла. «Серле йомғаҡ», «Айгөл менән себеш», «Балан ҡағы», «Биҙәкле бағана», «Ер-Әсә һәм унының ҡыҙҙары» тигән ижади эштәрен күптәр ҡыҙығып уҡығандыр.

Сулпан Имәнғолов исемендәге премия лауреаты исемелә Гөлнур Мәрхәмитдин ҡыҙын ҡанатландыра.

Эшендә тырыш хеҙмәткәр булһа, өйөндә унған хужабикә, хәстәрлекле әсәй, һөйөклөылдан ҡатын. Гөлнур Мәрхәмитдин ҡыҙы һәм Федор Михайлович өс тиҫтә йашыу бергә ингә-иң терәшеп ғүмер кисерә.Матур пар Фидәлия, Валерий, Олег исемле балалар үҫтереп, уларға лайыҡлы тәрбиә биреп, ныҡлы аяҡка бастырған.

Саф башҡортса аралашып, йыр-мондан, ижадтан айырылмай, дуҫ, татыу йәшәгән ғаиләгә һоҡланмаған кеше юҡтыр. Йәмәғәт эшендә бергә ҡайнайҙар, кәртә тултырып малын да асрайҙар, баҡсаһында йәшелсә, емеш - еләген дә үҫтерәләр. Гөлнур Семенова үҙен бик бәхетле кеше, тип һанай, яҙмышынан ҡәнәғәтлек кисереп, шөкөр ҡыла. Унын яратҡан эше, ғаиләһе, балалары бар. Ейән-ейәнсәре Азалия менән Денис, Альберт тормошона тағы йәм, ҡот өҫтәй. Милләтебеҙҙең, халҡыбыҙҙың тоғро ҡыҙы тиһәм, һис арттырыу булмаҫ. Киләсәктә лә уй-ниәттәрҙе тормошка ашырырға, яңы ҡаҙаныштарға, уңыштарға өлгәшергә яҙһын.

## *Инеш һүҙ*

Балалар донъяһы - халыҡ йәшәйешенең һәммәҙәниәтенең айырылмаҫ өлөшө. Һәр кешенең бала сағы - баланың киләсәк тормошҡа әҙерлек баҫҡысы түгел,ә кеше ғүмеренең йәшәү дәүрендәге, мәңге онотолмаҫ иң бәхетле мәле.

Шуға күрә һәр бер бала бәхетле булырға һаҡлы. Быуаттар буйына ата - бабаларыбыҙҙың тормош тәжрибәһе, ижады аша йәш быуынды шәхес, кешелеклек, әхлаҡлылыҡ, рухи хистәр, рухи байлыҡ үҫтерергә тырышҡан.

Иркен күңелле, һәр ваҡыт кешеләр менән яҡшы мөнәсәбәттә, ихтирамлы булырға өндәгән. Минеңдә балаларға булған һөйөүем, иҫ киткес бай мөғжизәләр иле, эскерһеҙ балалар әҙәбиәтенә этәрҙе. Бик күп йылдар йөрәгемде балаларға биреп эшләүем, уларҙың донъяһы эсендә ҡайнап йәшәү,

минең ижадымдың бөтмәҫ-түкәлмәҫ илһам-шишмәһе сығанағы булды, минең тормошта.

Балалар өсөн «Көнгәк» - гәзитендә баҫылған әҫәрҙәрем, күңелемә илһам өҫтәп тороусы, алла бирһә яҙыласаҡ әҫәрҙәремә йән һәм йәм биреүсе, рухи хазина байлығы булыр, тип һәм минеңдә әҫәрҙәремде ҡыҙығып уҡыусылар табылыр тигән ышаныста ҡалам.

Бала күңеле көҙге кеүеҡ асыҡ аҡ, саф шишмәнең һыуы кеүек таҙа. Шуның өсөн уҙемдең төп бурысымды, балаларға тормошто аңларға, уларҙы әҙәп-әхлаҡ, милли рух үҙаң, туған телгә һөйөү тәрбиәләүҙә күрәм. Шуның өсөн балалар баҡсаһында үткәргән дәрестәремде тыуған илгә, туған телгә һөйөү, милләттәр араһында дуҫлыҡҡа арнайым.

Балалар ҡулланылған ата - бабалар аҡылы, аҡһаҡалдар, ағинәйҙәрҙең фәһемле кәңәштәре, күренекле яҙыусыларыбыҙҙың әҫәрҙәрен ҡулланып, сәсәндәрҙең азатлыҡҡҡа, ғәҙеллеккә, татыулыҡҡа өндәүе, ялҡынлы, фәһемле кәңәштәре, йөр һүҙҙәре, һәр саҡ яҡшылыҡҡа, яҡтылыҡҡа әйҙәй һәм ярҙам итте.Үҙенде бер ваҡытта ла, баланан өҫтөн ҡуйырға ярамай. Яҙған әҫәрҙәремдә балалар күңеле иге-сиге булмаған эскерһеҙ мөғжизә менән тулы.

Әгәрҙә балаларҙы аңламаһаң, улар беҙҙелә аңламаясаҡтар.
Һәр баланы насар ғәҙәттәрҙән, тупаҫлыҡтан ҡурсаларға тырыштым.
Тәрбиәле бала-беҙҙең киләсәк!

*2.Котлогильдина. Р. Бәхет өсөн күп кәрәкмәй [Текст]*
*/ Р. Котлогильдина*
*// Башкортостан. - 2008. – 28 феврал. - Б. 4.*

## Бәхет өсөн күп кәрәкмәй

Беззең каһарман атай-олатайҙарыбыҙ йәш быуынға ғорур исем, ирек һөйөүсәнлек, киләсәк хаҡында хәстәрлек, дуҫты дошмандай айыра беләү һәләте, матурлыҡҡа табыныу, тыйнаҡлыҡ кеүек сифаттарҙы мираҫ иткән. Итәғәтлелек менән сабырлыҡты, изгелек менән имәнлектә һәм дә барса күркәм сифаттарҙы Аллаһы тәғаләбеҙ тәү башлап гүзәл заттарыбыҙғабүлеп биргәндер, мөғайын. Матурлыҡ, наҙ, иман менән үрелгән ихласлыҡ булғанда ғына донъябыҙ йәмле, сөнки тормошобоҙҙо биҙәүсе, тәрбиәләүсе катын-кыз бар.



Родовой дом в деревне Апасово



Мать Шарипова Разифа Сайфетдиновна, отец Шарипов Мархамитдин Валитдинович

Ошо юлдарҙы яҙганда шиғриәт аҡһаҡалы М. Кәримдең һүҙҙәре иҫкә төшә: «Яхшы аттар менән затлы ҡатындарҙың бер рухтан яралыуы тураһында мин ғүмер буйы тылҡыным. Юҡ, бәғзе ҡатындарҙың яҡшы нәҫел-нәсәбе тураһындағына әйтмәйем. Хәйер, нәҫел дәрәжәһеүҙе бер бәрәкәт: тамыры баҡырағастың сатыры алтынбулмаҫ. Әммә шундай ҡатындар килә был донъяға, уларҙың яралыуында, бар булыуында илаһи көстөң, илаһи уттың ҡатнашы күҙгә бәрелеп тора.Улар иң бейектә саҡта ла ерҙән айырылмай, иң түбәнгә төшкәндә лә түбәнлеккә төшмәй, хурлыҡҡа ла батмай;

уларҙы хатта аслыҡ - яланғаслыҡта кәмһетә алмай, сибәрлектәренә ҡагылырға ҡартлы күҙе тартына».


С родителями и младшей сестрой Гузель

Бына шундай тәрбиәле, тәртипле,күркәм холоҡло ханым хаҡында һүзәйтер, гаилә тигән оло дәүләттә һаҡлап тороусы тылсымлы көскә эйә әсәнеданлар өсөн ҡулыма ҡәләм алдым. Мәләүез районының зыялы шәхестәр биргән бәләкәй генә, әммә иҫ киткес хозур тәбигәтле, күлдәр иле булған Апас ауылы ҡызы Гөлнур Семенова хаҡында һүҙем.


С сестрой Гульшат

Мәрхәметдин агай менән Резида апай (хәҙер икеһе лә мәрхүм) ҡыҙҙарын бик матур тәрбиәләп буй еткерткән. Оло ҡыҙҙары Гөлшатка моң бүләкиткәндәр, кесе Гүзәлгә аҡлыҡ, паклыҡ, кешеһаулығын һаҡларҙай көҙрәт бирһәләр, ә инде уртансылары Гөлнурға мәғрифәт донъяһын, кеше тәрбиәләү бурысын йөкмәткәндәр.

Мин Гөлнурҙы ижадсы тип атар инем. Ул балалар баҡсаһында, гаиләһендә нур һибеүсе, ҡот


Молодые годы 1980 г.

таратыусы, ижадсы, илһам, сәм сығанағы.

Ер-һыуҙан көс, көҙрәт алып, ҙур теләк менән эшләй ул. 23-сө балалар баҡсаһын ысын ижад донъяһына әйләндергән. Башҡорт теле уҡытыусыһы булараҡ, эш бүлмәһен, класты милли биҙәктәр менән байытҡан.



Слева на право: Супруги Федор Михайлович, Гульнур Мархамитдиновна, дочь Федалия, сын Валера, сын Олег

Әсәһенең уң ҡулы, ярҙамсыһы булған ҡыҙы Фидалиә менән эшләгән тирмә, төрле ҡулэштәре күҙҙең яуын алып, ылыҡтырып тора. Тырышлыҡ һәм ныҡышмалылыҡ һөҙөмтәләре инде барыһы ла.

1984 йылда Күмертау ҡалаһындағы педагогия училищеһын тамамлағас, ҡыҙ яҙмышын балалар тәрбиәләүгә багышланы. Тәүге йылдарҙа «Күк сәскә» исемле 10-сы балалар баҡсаһында эшләһә, хәзер «Ысыҡҡай»за тиҫтәнән ашыу йыл хеҙмәт итә. Үҙ-үҙенә талапсан, маҡсатка ынтылышлы ҡыз

М. Акмулла исемендәге Башкорт дәүләт педагогия университетын ситтән



Шежере байрам 2018

тороп тамамланы. Ата-әсәләрҙән һәм район хакимиәтенең мәгариф бүлегенән гел рәхмәт хаттары, маҡтау һүҙҙәре генә алып йәшәй.

Гөлнур Мәрхәметдин ҡыҙының ата-әсәләрҙең ихлас теләктәре менән тулы дәфтәренә күз һалһаң, күңел йылыһы менән Һуғарылған теләктәрҙән күҙҙәргә йәш килә.

2002 йылда уҙғарылған район һәм ҡала бәйгеһендә III урынды яулауы уның профессиональ тәрбиәсе, уҡытыусы, эште ойоштора белгән

Һәләтле педагог икәнлеген раҫлай. 5-се мәктәп етәкселеге лә ул тәрбиәләгән балаларҙың төплө белемле икәнлеген һыҙык өҫтенә ала. Ғаиләһендә лә үңган ҡатын, өлгөр, етеҙ әсә ул. Тормош иптәше Федор менән алып баралар. Өс бала тәрбиәләп үҫтерзеләр.

Өлкән кыҙҙары Федалиә аш - һыу оҫтаһы, ашнаҡсы – кондитер, Мәләүез механика - технология техникумын тәмамлап, химия заводында эшләй. Ситтән тороп юғары белем ала. Улдары Валерий гаиләһе менән калала йәшәй. Кинйә улдары Олег 9 класты тамамлап, техникум студенты булып китте. Ата-әсәләре төрле милләттән булһа ла, балалары сыуаш һәм башҡорт телдәрендә сатнатып һөйләшә. Үҙ-ара аңлашып, татыу йәшәгән Семеновтар ғайләһендә һәр сак тормош кайнап тора. Бергәләп малга аҙык әҙерләйҙәр, баҡса эштәрен башҡаралар, шул уҡ ваҡытта улдары Валерийзың гаиләһенә өй һалырга ярҙамлашалар. Ошонан да ҙурыраҡ бәхеттең булыуы мөмкинмени ул-ҡыҙҙар үҫтереүсе ата-әсә өсөн.



*В семейном кругу*

**3.Семенова Г. Ер әсә һәм уның ҡыҙҙары [Рукопись] +0 / Г. Семенова. - Каран : Каранская б-ка, 2018. - 4 б.**

## Ер әсә һәм уның ҡыҙҙары



Йәшәгән ти донъяла ҡара бәрхәткә оҡшаған тылсымлы балаҫ. Исеме булған Ер-Әсә. Йылы, йомшаҡ, йомарт Ер-Әсәнең күкрәгендәге күктәргә ашҡан мөһабәт тауҙарҙан уралып-уралып аҡҡан шифалы, саф йылғалар уйһыуҙарҙан һылыу башҡорт ҡыҙҙарының бөҙрә сәс толомдарына ҡушылып үрелгән тәңкә-сулпылар сылтыраған кеүек, сихри тауышлы мөғжизәле шишмәләр юл алған.



Башҡорт сибәренең йәшел еләнен хәтерләткән болон-туғайҙарҙа емелдәшкән тере тәңкәләр төҫлө төрлө сәскәләр үҫкән.

Ҡалын урмандары ла үтеп сыҡҡыһыҙ булған. Ел иҫкәндә уйһыу болондарҙа сихри моң сығарырға ашҡынып ҡурай үләне лә үҫкән. Уға ҡушылып төрлө бөжәктәр ауаз һалған, сәскәнән-сәскәгә ҡунған наҙлы күбәләктәр, йөрәктәргә хуш килгән мондо тыңлап үҫкән йәнлектәр, тирә-йүнгә йәм өҫтәүсе эш һөйәр бал ҡорттары ла симфония уйнаған.

Ер-Әсәнең береһенән-береһе сибәр, аҡыллы, әммә төрлө холоҡло дүрт ҡызы бер-бер артлы донъяға килгән. Быға ул, әлбиттә, бик ҡыуанған, үҙен сикһеҙ бәхетле тойған һәм уларға бик мәғәнәле

исемдәр ҡушҡан. Өлкән ҡыҙына - Яҙһылыу, икенсеһенә - Йәйһылыу, өсөнсөһөнә - Көҙһылыу һәм төпсөк ҡыҙына Ҡышһылыу, уны иркәләп Ҡарһылыу тигән.



Балаларын Ер-Әсә бик яратҡан, улар өсөн һөйөнөп туя алмаған. Мейестә ҡабартып икмәк бешергән. Икмәк бик уңған, тәмле еҫтәр сығарып, йылы бөркөп торған.

Икмәк бик эҫе булғас, балаларым бешеп ҡуймаһын, бөтә кеше уны ҡәҙерләһен тип, бик юғарыға күтәреп ҡуйған да, ҡабарып бешкән икмәккә «Ҡояшҡай» тип исем ҡушҡан. Икенсе икмәге мейестән алғанда бешеп өлгөрмәгәндерме, эҫе булғас, ҡулынан төшөп киткән, шул саҡта әҙерәк йәмшәйгән, ҡыйылып эшләгән алҡаға оҡшап ҡалған. Бөтә донъя күрһен, төндә ике йөрәк серләшкәндә, йәш йөрәктәрҙән сыҡҡан саф мөхәббәт һүҙҙәренә шаһит булһын, тип «Ҡояшҡай»ына әхирәт итеп, ҡыйылған икмәкте лә күккә күтәреп, мөғжизә тыуҙырып, «Айһылыу» тип матур атама биргән.

Ер-Әсә тағы ла күркәмләнеп киткән. Һулышы - талғын иҫкән ел – Яҙһылыуҙың бөҙрә сәстәрен иркәләп туҙҙырған. Ер-Әсә хәйләһеҙ ҡояш нурҙарын, яҙғы йәш бөрөләрҙе, йәшел япраҡтарҙы, умырзая сәскәләрен уның сәс толомона ҡушып үргән. Йылы яҡтан тыуған ерен өҙөлөп һағынып ҡайтҡан сыйырсыҡтар, һабантурғайҙар һайраған. Яҙ килтереүсе һабантурғайҙары яҙғы көн йыл туйҙыра тип һайрашҡан. Быны һиҙемләгән халыҡ Ер-Әсәне тәрбиәләргә, сәсеүгә дәррәү сыҡҡан.



Сабыр Йәйһылыу ҙа үҙенең сибәрлеген йәшермәгән, йомартлығын оҙон толомдарына, күҙҙең яуын алып торған төрлө төҫтәге болон сәскәләрен, ҡыҙарып бешкән һутлы еләктәрен ҡушып үргән.

Был сихри матурлыҡты, тәмле хуш еҫтәрҙе кескәй генә йәндәре менән һиҙгән күбәләктәр - һут, егәрле бал ҡорттары -

бал йыйған. Шулай итеп, татлы ризыҡ сирлеләргә дауа булған башҡорт балы барлыҡҡа килгән.

Ҡышһылыу килгәс, ҡар өҫтөндә икмәк үҫтереп булмағанлығын аңлаған Йәйһылыу «Хеҙмәттең төбө - һары алтын» тип, йәшәү сығанағы - икмәкте үҫтереүгә өҫтөнлөк биргән, ҡолонсаҡтар, быҙау, кәзә, һарыҡ бәрәстәре өсөн йәшел үлән күбә, кәбәндәр ҡойорға ярҙам иткән. Йәйһылыу бик шаян булған, төрлө уйындар уйнарға яратҡан. Бигерәк тә «һыу һибеш» уйыны шәп тигән. Һауаны таҙартыу өсөн дөһөрләтеп, ялт-йолт итеп йәшенмәк уйнап, ямғырҙар яуҙырғас, Ер-Әсәнең йөҙө тағы ла сәскә атҡан.

Көҙһылыу моңһоуыраҡ, сәйер холоҡло булһа ла, әсә йөрәге кеүек мул уңыш үҫтергән. Ҡыҙыу мәл-уңыш йыйыу башланған. Көҙ һары буяуҙар менән ағастарҙың япраҡтарын, Ер-Әсәнең йәшел күлдәген төрлө буяуға мансыған. «Ер-Әсә йөрәгендә үҫтерелгән иң изге ризыҡ – икмәк, ҡоштарҙың, хайуандарҙың, кешеләрҙең йәшәү сығанағы булыр. Сасҡау ҡыштарҙа туҡ халыҡтың кәйефе лә күтәренке, рухы ла шат буласаҡ, икмәк үҫтергән игенселәрҙе хөрмәт итәйек», - ти Көҙһылыу.



Ҡышһылыу ҙа үҙенең серле, тылсымлы нәфислеге менән иркәләй, әйтерһең дә, ҡабарған аҡ шәле менән бөтә донъяны ҡаплаған да, тирә-яҡты мөғжизәгә күмгән.
Атлаған һайын табан аҫтында шырт-шырт иткән сихри моң барлыҡҡа килгән. Һалҡын елдәр тын юлдарын иркенәйтә, бит алмаларын алһыуландыра. Сабыйҙар бите, әйтерһең дә, бешкән алма. Ҡарһылыу аҡ шәлен ябынған, ағастар таҡыя кейгән.
Ер-Әсәгә яратҡан ҡыҙҙары алмашлап ҡунаҡҡа килеп торған, ул был мөғжизәгә бик шатланған.

## *Матушка земля*

Жил да был на свете волшебный ковер, похожий на черный бархат. Этот ковер Матушка - земля. Из груди Матери земли, начинали петь реки и родники, напоминающие звон монет, вплетенных в косы башкирских красавиц. На зеленых полянах цветов похожих на одежду башкирских девушек, росли разноцветные цветы, блистая на солнце. Густые леса были непроходимыми. При дуновении ветра цветок курая издавал волшебные звуки, в которую вплетались звуки разных насекомых, порхание бабочек,

неутомимый труд муравьев – все это создавало симфонию жизни, красоты окружающего мира.

У Матери земли росли 4 девушки – одна краше другой, но с разными характерами. Она была, очень счастлива,  дочерям своим дала, имена со значением – Весна, Лето, Осень, и Зимушка. Своих дочерей она очень любила, и пекла для них очень вкусный и душистый хлеб. Хлеб был очень горячим  и поэтому мать подняла хлеб очень высок, для того чтобы дети не обожглись, чтобы люди ценили хлеб. И назвала этот хлеб «Солнышком». Когда стала вынимать второй хлеб из печи, он выскользнул из её рук, потому что был очень горячим, и получил вмятину, похожую на серьгу, напоминающую луну. Матушка земля назвала этот хлеб «Луной» или Айсылу.

С каждым днем земля становилась все краше, она вплетала  кудрявые волосы дочери Весны – солнечные лучи, весенние почки, первые зеленые листочки, первые цветы. С теплых краев возвращались  соскучившиеся по родной земле скворцы, жаворонки. Они своим пением напоминали что, весенний день год кормит. И люди торопились ухаживать за матерью - землей, начинали весенний сев.

Лето тоже не скрывало своей красоты. Девушка вплетала в свои длинные косы невиданной красоты цветы, сочные лесные ягоды. Привлеченные этим волшебным ароматом, бабочки собирали с цветов сок, а трудолюбивые пчелы собирали мед. Таким образом, появился знаменитый башкирский мед, имеющий лечебные свойства. Лето хорошо понимала, что зимой не вырастишь хлеб. Потому помогало вырастить больше травы, чтобы можно было приготовить больше сена для домашних животных. Красавицы, а лето была озорной  и любила разные игры, очень нравилось играть в прятки, любила поливать землю, чтобы она стала еще краше, любила вызывать грозу, чтобы воздух стал чище.

Осень была немного грустной, но она была как материнское сердце – щедрой. Осень разукрасила золотым светом листья деревьев, а платье матери земли - разными цветами.  Началась горячая пора – жатва,  и  на груди матери земли выращенный хлеб  будет источником жизни для людей, птиц, животных. В холодные зимние дни  у народа будет хорошее настроение, надо уважать хлеборобов; говорила Осень.

И Зимушка ласкала всех своей волшебной красотой, покрыв своей белой шалью всё вокруг. Каждый шаг рождает волшебную мелодию.  Холодный ветер разрумянил лица прохожих. Снегурочка в своем белом одеянии позаботилась и о деревьях они тоже стоят сказочно красивые с белой

бахромой. Дочери приходили к матери – земли каждая в свой черед, радуя материнское сердце, и радуя своим волшебством всех людей.

***4. Семенова Г. М. Серле йомғаҡ  [Рукопись] +0 / Г. М. Семенова. - Каран : Каранская б-ка, 2018. - 3 б.***

## *Серле йомғаҡ*



Борон-борон заманда, иҫ китмәле мөғжизәләргә тиң, йәмле тәбиғәт ҡосағында йәшәгән ти, әбей менән бабай. Ҡарсыҡ көндәр буйы йөн иләгән, эшһөйәр бабай ҡаҙ-өйрәктәргә йомортҡа һалһын өсөн талдан оя үргән, ҡош-ҡорт көткән, йылға буйында балыҡ тотҡан.

Бер көн шулай әбей йөн иләп ултырғанда арып ойоп киткән дә, ҡулындағы йомғағы тәгәрләп төшөп киткән. Был тауышҡа йылы мейес башында йоҡлап ятҡан бесәй балаһы уянып төшөп, йомро йомғаҡты тәгәрләтеп уйнарға тотонған. Йомғаҡ әле тегеләй, әле былай ишектән тупһаға, тупһанан ихатаға тәгәрләгән. Бесәй балаһы йомғаҡтан күҙен алмай, эйәреп сыҡҡан. Тәпәйҙәрен ҡаҙ үләне ҡытыҡлағандай иткәс, ҡояш нурына иркәләнеп, уны күҙәтеп ятырға булған. Ята торғас, тәмле йоҡоға талған.

Йомғаҡ юлын дауам иткән. Уны Аҡбай күреп ҡалған, әле бер яҡтан, әле икенсе яҡтан әйләнеп йөрөп, тикшерергә тотонған. Тәгәрләтә торғас, хәле бөтөп, теле һәленеп, ҡыҙыу ҡояштан ҡасып, күләгәгә барып ятҡан.



Йомғаҡ алға тәгәрләүен белгән. Тиҙҙән ҡаңғылдашҡан, сипылдаған тауышҡа туҡтап, мамыҡтай бәләкәй генә йән эйәләренең ҡанат ҡағып, ҡайҙалыр ашығыуын күреп ҡалған. Ҡаҙ бәпкәләрен эйәртеп, йылға буйына йыйынған икән.

Алға табан ынтылған йомғаҡ таныш кәрзинде күргән: «Кис  һайын хужабикәм ҡыҙыл, һары, йәшел төҫтәге минең кеүек йомғаҡтарҙы ҡәҙерләп кенә алып ошо кәрзингә һала ине түгелме?  «Кәрзингә яҡынайыу менән «сип-сип», «ҡыт-ҡыт» тигән тауыш килгән, тауыҡ йомғаҡҡа оҡшаған һап-һары йомроҡайҙарҙы эйәртеп сыҡҡан, улары үләнгә әләгеп, төрлө яҡҡа тәгәрләй икән. Йомғаҡ таныш кәрзинден

эсенә үк төшөп ятҡан да: «Ниндәй тылсымлы оя. Серем итеп алһам да була», - ти тәгәрләүҙән туҡтаған ти.

Әбей уянып китһә, ҡулында йомғағы юҡ. Бик оҙаҡ эҙләп таба алмаған. Бабайы ла күрмәгән. Күпмелер ваҡыт үткәс, әбей тауыҡ йомортҡа һалғандыр, бәлки, тип, ояны ҡарарға сыҡҡан. Ҡулын һуҙыуы булған, бәй, аптырап, йомғағын килтереп сығарған. Ҡыуанысынан үрле-ҡырлы һикереп, шатлыҡлы хәбәрен еткерергә бабайы янына ашыҡҡан, саҡ әләгеп йығылмаған.

Йомғаҡҡа уралған донъя йәме өй эсенә тулған. Сихри моң-ауаздар һеңгән төҫлө йомғаҡтарҙы әбей йылы ҡулдарына алған, биҙәктәр төшөрөп, ейән - ейәнсәрҙәренә ойоҡбаш, бейәләй, башлыҡтар бүләк иткән.

## *Волшебный клубок*



В давние времена, в краю прекрасном полной чудес, жили - были дед да баба. Бабушка целыми днями пряла, а трудолюбивый дед для уток и гусей плел из ивы корзины, ухаживал за выводками этих птиц, и ловил рыбу в реке.

Однажды баба, сидя за пряжей вздремнула, а клубок выпал из её рук. На звук выпавшего клубка проснулся котенок, спавший на печке, и начал играть с клубком. Клубок покатился сначала за порог, а потом выкатился во двор. Котенок побежал вслед за ним. Трава щекотала ему лапки, нежась под лучами солнца, стал наблюдать за клубком, так лежа на травке и уснул. А клубок продолжал свой путь.

Его увидела собака Акбай, она схватила клубочек и стала переворачивать его, то в одну, то вдругую сторону. Обследовав клубок, устал, спрятался от палящих лучей солнца в тенистое место и уснул. Клубок покатился дальше, он остановился, услышав писк, и увидел как маленький пушистый комочек куда-то торопится. Оказалось что, гусыня повела своих гусят на реку.

Цыплята были похожи на пушистые клубочки, которые вела их мать. Цыплята путались в густой траве, выкатывались из травы, весело пищали.
Клубок устремился вперед и увидел знакомую корзину. «Каждый день моя хозяйка складывала в эту корзину - красные, желтые, зеленые клубочки - подумал он. Клубок закатился в знакомую корзину, подумав, какое это волшебное место, можно и подремать.

Бабушка проснулась, а клубочка то нет. Искала-искала, спрашивала и у деда, а тот тоже ничего не видел. Через некоторое время она пошла к

корзине подумав, может курица снесла яйцо. Вместо яйца выташила клубок и удивилась. Обрадовавшись, бабушка пошла к старику делится, эти событием.

Радость пришла в этот дом. Бабушка из этих клубков, впитавших в себя волшебные мелодии, звуки, связала внукам носки, варежки, шапки, вложив в эти узоры теплоту и щедрость своей души.



***5. Семенова Г. М. Айгөл менән себеш [Рукопись] +0 / Г. М. Семенова. - Каран : Каранская б-ка, 2018. - 2 б.***

## *Айгөл менән себеш*



Иртәнге ҡояш нурҙары иркәләп Айгөлдө йоҡоһонан уятты. Ихатаға сығып, саф һауаны һулап, ялан аяҡ йәшел үләндә йөрөп ингәс, тештәрен таҙартты, битен-ҡулын йыуҙы, сәсен тараҕас, сәй ҡайнатты.

Мәтрүшкә, йүкә сәскәһе һалып, сәй әҙерләне. Өҫтәлгә һары себеш төшөрөлгән ашъяулыҡ йәйҙе. Шунан тәмләп-тәмләп бал, еләк ҡайнатмаһы менән сәй эсеп ултырғанда, ҡалағынан һуҙылып, себештең өҫтөнә бал тамды, әҙерәк сәйе лә түгелеп китте, икмәк валсыҡтары ла өҫтәлгә ҡойолдо, хатта иҙәнгә лә төштө.



Быны күреп ҡалған әсәһе: «Ҡыҙым, ашағанда әҙәпле булырға кәрәк, өҫтәл өҫтө таҙа булырға тейеш. Сәйҙе түгеп-сәсеп эсергә, икмәк валсыҡтарын да төшөрөргә ярамай. Иҙәнгә төшкән икмәк валсыҡтары тапала, ашъяулыҡтағы себешең

дә күшеккән», - тип  өҫтәлде һөртөп алды. Хатаһын аңлаған ҡыҙ, әсәһенән ғәфү үтенде. Бер көн шулай Айгөл төш күрҙе.

Көндәгесә сәй әҙерләне лә, эсергә ултырҙы. Әсәйем дә эшкә киткән, яңғыҙыма күңелһеҙ, тип уйлап өлгөрмәне, ашъяулыҡҡа төшөрөлгән себеш унын иғтибарын йәлеп итте. Бәпембә сәскәһеләй һары себеш йәнләнеп өҫтәлдә йөрөгәндәй тойолдо.

Айгөл баллы сәйен йотторҙо. Ҡалай тәмле сәй эсәһегеҙ тигәндәй, себеш бүл-бүл-бүл итеп сәйҙе йотто. Еләк ҡайнатмаһын ауыҙ иткәс, себештең кәйефе бөтөнләй күтәрелде. Бындай тәмле еләктәрҙе ҡайҙан алдың, Айгөл?“ - тигәндәй, сылт-сылт итеп күҙ-ҙәрен йомоп алды. Айгөл, тиҙ генә таҫтамал алып, ашъяулыҡты тап-таҙа итеп һөртөп алғас: «Ҡыҙым, тор инде, таң атты!» - тип  әсәһе арҡаһынан һөйөп уятты

## *Айгуль и цыпленок*

Утренние лучи солнца ласково будили Айгуль.  Проснувшись, вышла во двор, почистила зубы, помылась, причесалась, приготовила час с матрешкой, липовым цветом.  Постелила на стол скатерть с вышитым на ней желтым цыпленком.

И  начала пить чай с медом,  с вареньем. Из её ложки выпала капля меда, пролился чай прямо на цыпленка, крошки хлеба упали на стол и даже на пол.

Увидев это мама сказала дочери, что за столом надо вести себя аккуратно, на столе должно быть чисто, не надо крошить хлеб, ведь наних кто-то может наступить, вот и цыпленок промок. Быстро вытерли стол, собрали крошки.

Через некоторое время Айгуль уснула и ей приснился сон. Как  будто она приготовила чай  и села за стол, подумав что ей будет скучно одной за столом. И тут она обратила внимание на цыпленка на скатерьти. Ей показалось что желтенький похож нацветок одуванчика, цыпленок расхаживал по скатерти.

Аугуль подала ему чай с медом, цыпленку такой чай понравился. Попробовав варенье из ягод цыпленок  поморгал глазами,  как будто хотел спросить, где она берет его.  Угостив цыпленка Айгуль  убрала со стола, вытерла начисто стол. В это время  мама  ласково, нежно разбудила дочку, сказав:  «Просыпайся, дочка, уже утро наступило».



***6. Семенова Г. М. Балан ҡағы [Рукопись] +0***
***/ Г. М. Семенова. - Каран : Каранская б-ка, 2018. - 2 б.***

## *Балан ҡағы*



Бөгөн дә Гөлбикә апай туғайҙан бер силәк балланып бешкән, татлы, ҡыҙыл баланды тиреп өйгә алып ҡайтты. Уны һалҡын һыуҙа сайҡатып, суйынға һалып, ҡыҙарып ятҡан ҡуҙҙарҙы усаҡҡа тартып, мейес эсенә бешерергә ҡуйҙы. Тиҙҙән тәмле еҫтәр таратып, балан беште. Уңған хужабикә иләк аша үткәреп, баланды һөйәгенән айырҙы ла, таҡтаға һалып, йоҡа ғына итеп йәйеп, ҡаҡ ҡойҙо.

Мейестең иң башына киптерергә ултыртты. Өй эсендәге тәмле еҫ урамдан уйнап ингән ҡыҙҙары Гөлсинәнең танауын ҡытыҡланы. Мөғжизә утрауын әйләнеп сыҡҡандан һуң, тәмле еҫ мейес башына мендерҙе. Шул тиклем үҙенә тартып торған ҡаҡты, башта бәләкәй бармаҡтары, унан тел осо менән тәмләп ҡарарға булды.

Их, ниндәй тәмле! Телеңде йоторлоҡ.  Апаһының мейес башына йыш менеп - төшөп йөрөүе ҡурсаҡтары менән уйнап ултырған бәләкәй Гөлнәзирәне һағайтты. Апаһы төшкән арала, ул да мейес башын тикшереп ҡарарға булды.

Ә, эш бына нимәлә икән! Әсәйемдең иң тәмле ҡағы кипмәҫ элек тәмләйем тип, ул да ялап ҡараны.

Ҡыҙҙарҙың эше көйләнде, ҡаҡ та яланып бөттө. Гөлбикә апай бер көндө, йәйгән ҡағы иҫенә төшөп, кипкәндер инде,  алырға ваҡыт еткәндер, тип таҡтаны алһа, үҙ күҙҙәренә үҙе ышанманы.

- Был ниндәй хәл, атаһы?

Әллә бесәй ялаған инде?

Быны тыңлап ултырған ғаилә башлығы таҡтаны алып ҡарап:

- Ниндәй бесәй  булһын инде, ҡаҡ өҫтөндә бәләкәй тел эҙе лә бар, ҙурҙыҡы ла, -тигәс, ҡайһы бер балалар көлә башлай. Ә ҡаҡты ялаусыларҙың бит алмалары ҡыҙара.

- Әсәй! Беҙ бит ҡаҡ йоҡарһа, тиҙерәк кибер тип тырыштыҡ! - тиҙәр баштарын аҫҡа эйеп.

# *Пастила из калины*

Гульбика апай сегодня принесла из леса целое ведро красной созревшей сладкой калины.



Помыла в холодной воде, положила в чугунок и поставила на горящие угли в печку, скоро ароматный запах распостранился по всему дому.

Хозяйка через сито пропустила калину, освободила от косточек и тонким слоем разложила на доску. Поставила все это на печку сушиться.

Аромат пастилы привлек внимание Гульсины прибежавшей с улицы домой. Обойдя дом, она поняла, что аромат доносится с печки. Взобравшись на печку и обнаружив источник аромата, решила попробовать кончиками пальцев. Лизнув, восхитилась - Ах, как вкусно! Язык проглотишь! Младшая сестра Гульназира которая играла со своими игрушками, обратила внимание что сестра часто лезет на печку. В чем же тут дело? Она тоже решила попробовать вкусную пастилу. Так девочки в скорее съели всю пастилу.

Гульбика апай вспомнила пропастилу, подумав, что она готова и взяла с печки доску. Не поверила своим глазам, спросила кто это может быть. Может кошка слизнула пастилу? - сказала Гульбика апай. Отец взял доску посмотрел и сказал: «Какая кошка?» - тут следы маленьких и больших пальчиков оставленные детьми. Старшие дети засмеялись, а маленькие девочки покраснели. «Мама! А ведь мы думали, что пастила станет тоньше и поэтому быстрее высохнет», - оправдывались дети.



***7. Семенова Г. М. Имән сәтләүеге [Рукопись]***
***/ Г. М. Семенова. - Каран : Каранская б-ка, 2018. – 5 б.***

## *Имән сәтләүеге*

( әкиәт)



Борон-борон заманда йәшәгән, ти әбей менән бабай. Берҙән – бер көндө ҡарт ҡалтыранған ҡулдары менән балаларҙы иркәләгән кеүек ҡарсығының арҡаһынан һөйөп күкрәгенә ҡысты.

- Әй, әбей, күпме ғүмер иттек, Аллаға шөкөр. Бик күп сабаталар үреп кейеп туҙҙырҙыҡ, матур ҙа, татыу ҙа йәшәнек. Шуныһы үкенесле, бер генә бөртөк балабыҙ ҙа булманы. Бабай илап ебәргән. Шуны ғына көткәндәй, ҡарсығы ла ҡушылып сеңләгән.

Әбей ҡапыл илауҙан туҡтап: - Сеү! Бабай, илама! Үкенескә ҡалмаһын, әйҙә күрәҙәсегә барайыҡ, - тигән.

Ҡарт һаҡалын һелкетә - һелкетә күҙ йәштәрен һөртөп ризалашҡан. Тиҙҙән икәүләп, хәйер - саҙаҡа әҙерләп, белгәндәрен уҡынып, өмөт саҡтыһы бирәсәк йортҡа килгәндәр. Бағымсы менән хәл - әхүәл һорашҡан, ҡарттар үҙ хәсрәтен һөйләп биргән. Дөнъя күргән, уҡымышлы, тирә - яҡта дан тотҡан кеше быларға бер бөртөк имән сәтләүеге өшкөрөп биргән.

Ҡыуаныстан үксәләре ергә теймәй, сәтләүекте төшөрөп ватыуҙан ҡурҡып, өйгә табан йүгергәндәр. Бабай ирендәрен ҡыбырлатып көйләй-көйләй сәңгелдәк әҙерләгән. Әбей сағыу төҫлө туҡыманан мендәр, түшәктәр яһаған.

Бик күп ваҡыт үткән. Сәңгелдәкте бәүетеп ултырып ҡулдары талған. Әммә бер үҙгәреш һиҙелмәгән. Күрәҙәсенең яңылышыуын асыҡлар өсөн ҡайтанан теге йортҡа йүнәлгәндәр.

Имсе сәтләүекте нисек һаҡланыуын һорашҡас:

- Бик дөрөҫ эшләгәнһегеҙ. Ул һеҙҙең мөхиткә өйрәнгән, инде ергә сәсеп, мөғжизә көтөргә ҡала,- тигән.

Бабай матурлап түтәл яһай, ҡарсыҡ ҡомғанынан һыу һибә. Сәтләүекте бик ҡәҙерләп сәсеп ҡуялар.

Бер мәл әбей-бабай тәм-том менән һыйланып, сөкөрҙәшеп сәй эсеп ултырғанда, тышта һайысҡан шыҡырыҡлаған тауыш ишетелә. Тәҙрә аша ҡараһалар, ишек алдында имән кеүек теремек бер ир бала уйнап йөрөй.



Күп тә үтмәй, соланда аяҡ тауышы ишетелә һәм ишектән мыҡты кәүҙәле ир-бала килеп инә. Бер аҙ ҡарттарға ҡарап торғас, яҡын барып ата-әсәһен ҡысып ҡоçаҡлап ала. Бәхетле әбей, бабай малайға Имән батыр, тип исем ҡуша. Ир бала ай үçәһен көн үçә,йыл үçәһен көн үçә, йыл үçәһен көн үçә, йыл үçәһен ай үçә. Бер аҙҙан Имән батыр, донъя күреп киләйем тип, ата-әсәһенән фатиха алып сығып китә.

Әбей юлға сәй, шәкәр, икмәк, ҡорот, май тултырылған төйөнсөк әҙерләй, бабай ҡурайын һәм уҡ-һаҙаҡ тоттора.



Балаһына хәйерле юл теләгән әбей күҙ йәштәрен яулыҡ осона һөртөп ҡала.

Ата-әсәһен, тыуған ерҙәрен ташлап сығып китеү бик ҡыйын була егеткә.

Имән батыр оҙаҡ бара торғас, урман-һыуҙар үткәс, ял итеп алмаҡсы була. Тирә-яҡта ҡоштар һайрай,сиңерткәр сеңләй, бал ҡорттары безләп, сәскәләрҙән бал йыя, талғын ел иçә.

Имән батырҙың ҡолағына әкрен генә тауыш ишетелә:

- Ҡотҡарығыҙ! Ҡотҡарығыҙ! Егет һикереп тороп, яҡ-яғына ҡарай. Сылтырап аҡҡан йылға ҙур ташҡа быуылып, аға алмай ята икән. Имән батыр ташты күтәреп алайым тиһә, уны ҙур ҡара йылан һаҡлап ятҡанын күрә. Егет ҡурайын алып, көй һуҙып ебәрә. Йылан башын күтәреп, ғәфү үтенгәндәй борғолана ла, шыуышып китә. Имән батыр ташҡа үрелә, унывһы көс еткеһеҙ имеш. Нимә эшләргә. Шул саҡ бәләкәй генә, һаҡалы биленә еткән бабай үтеп барғанын күрә.

- Бик изге эш эшләйһең, улым. Тик ташҡа көсөң етенкерәмәç, тип тылсымлы таяғын бирә. Таяҡты таш аçтына ҡуйып

- Бер, ике, өç. Беҙҙә – бөтә!, тигәс, таш еңел генә өçкә кутәрелә һәм икенсе урынға шылып ята. Быуылып ятҡан йылға телгә килә.

- Рәхмәт, һиңә батыр егет! Көмөш тамсыларын сылтыратып артабан юлын дауам итә.

- Шишмәкәй, һиңә ниндәй исем бирәйем ? - тип һорап башын эйгән егет.

- Мине олатайҙар электән Ағиҙел, тип йырҙа йырлай,- тигән йылға.

- Һыуымды тәмләп ҡара. Устарына һыуҙы алып эскәс, Имән батырға көс - хәл ингәндәй була.

- Ысынлап та һин шундай саф, һыуың татлы, - ти егет.



Бер заман теге яҡ ярҙа сәмреғоштоң үткер тырнаҡтары менән һандуғасты ҡамап тотоп, осло суҡышы менән суҡырға йыйынғаны куҙгә салына. Егет уҡ - һаҙаҡты ҡошто рәнйеткән сәмреғошҡа төҙләй. Яуыз ҡош табышын ташлап осоп китә, ә һандуғас егет эргәһендәге ҡайын ботағына ултырып рәхмәтен белдереп һайрай башлай.

Имән батыр, оҙаҡ йөрөй торғас, бик бейек, текә тауға барып сыға. Тырышып- тырышып менә лә, ҡурайын һыҙҙырып ебәрә. Моң Ағиҙел йылғаһына ҡушыла.

Ошо мәлдә аллы - гөллө сәскәләр, ҡурай үләндәре ҡояш балҡығандай баштарын күтәрә. Тау башында тылсымлы ҡурайын әйләндергән һайын,имән әкәләктәре аҫҡа тәгәрләй. Һәр тубырсыҡтан таң атҡансы йәш имәндәр үҫеп сыға. Улар көнгә ҡарап, төҙ, матур, ныҡ булып үҫә. Көнгәк тауында урман хасил була. Егет ата-әсәһе, иле алдында бурысын үтәй. Тиҙҙән Миләшкәй исемле һылыу ҡыҙға өйләнеп, балалар үҫтерәләр. Ҡарт менән ҡарсыҡ бөген дә ҡыуанышып йәшәйҙәр, ти...

## *Дуб-батыр*

Жили - были старик со старухой. Однажды старик дрожащими руками прижал к себе старуху и сказал: «Сколько лет мы с тобой прожили, слава богу, сколько лаптей износили, жили дружно. Только одно жалко: нет у нас детей, ни одного нет». Заплакал старик. Старуха тоже запричитала было, но вдруг перестала плакать и сказала:

- Не надо плакать, пойдем к гадалке. Дед, вытирая слезы, согласился. Через некоторое время, приготовив подарки, читая молитвы, переступили порог дома, в надежде обрести долгожданное счастье. Поздоровавшись с гадалкой, старики рассказали о своем горе. Ученая, знаменитая своими знаниями гадалка, подала им желудь, предварительно прочитав молитвы.

Радостные, боясь уронить желудь, побежали старики домой. Старик, напевая мелодию, готовил колыбель. Старуха из яркой ткани приготовила

одеяло, подушку. Прошло много времени. Сидели старики рядом, качали колыбель, уже и руки устали, но чуда не случилось. Решили вернуться к гадалке, чтобы узнать, какую ошибку они допустили.

- Вы все правильно сделали. Он привыкал к вашему дому. Сейчас можно посадить желудь в землю и ждать чуда, - сказала гадалка. Старики так и сделали. Дед сделал красивую грядку, бабушка из кумгана полила посаженный в землю желудь. Старики сели с хорошим настроением пить чай, но тут услышали крик сороки. Посмотрели в окно, а там во дворе играет мальчик, похожий на молодой дубок. А потом послышались шаги, и в избу вошел этот самый мальчик. Посмотрел на них, подошел к ним, крепко обнял, назвал их отцом и матерью. Счастливые старики назвали его Дуб-батыр. Очень быстро рос мальчик. Однажды он сказал своим родителям, что хочет повидать свет.

Старуха приготовила на дорогу узелок с хлебом, маслом, курутом. Старик передал сыну курай, лук и стрелы. Пожелали счастливого пути, со слезами на глазах проводили сына. Сыну тоже было грустно покидать своих родителей и милый глазу края.



Шел батыр долго, через непроходимые леса, через быстрые реки и решил отдохнуть. Птицы поют, кузнечики стрекочут, пчелы жужжат. Веет теплый ветерок. И вдруг батыр слышит голос с просьбой о помощи. Вскочил он, смотрит по сторонам. Оказывается, огромный камень запрудил течение реки. Хотел парень поднять камень, а под ним лежит огромная змея, охраняющая этот камень. Взял батыр свой курай и заиграл. Змея подняла голову, как бы извиняясь, и уползла. Хотел батыр поднять камень, а он неподъемный. Что делать? И в этот миг он увидел маленького старичка с бородой по пояс.



- Ты делаешь святое дело, сынок. Но один не осилишь, - говорит старичок и подает ему волшебный посох. Стоило батыру засунуть палку под камень и скомандовать. «Раз, два, три», как камень легко сдвинулся с места. Река поблагодарила парня и понесла свои серебряные струи дальше.

- Как тебя зовут, серебряная река? – спросил парень.

- Меня старики называли Агиделью, прославляли в своих песнях. Ты попробуй испить из реки, - сказала она.

Взял парень в ладони воду, испил, и сразу прибавилось сил.

- Какая ты чистая, сладкая, - поблагодарил парень реку.

В это время на другом берегу орел своим острым клювом схватил соловья и собирался склевать. Парень прицелился в орла, схватившего соловья. Орел, испугавшись, бросил соловья и улетел; а соловей уселся на ветку березы и своей песней поблагодарил батыра.

Долго бродил парень, повидал много чудес, восторгался красотой родного края, и вот очутился возле высокой горы. Взобрался на вершину и заиграл на курае. К звукам курая вплела свою мелодию и река Агидель.



И от звука курая подняли свои головы и разноцветные цветы. Играл на волшебном курае парень, и посыпались с дубов желуди, каждый из них дал росток, и к рассвету выросла дубовая роща. Таким образом, на горе Кунгак появился дубняк. Парень выполнил свой долг и перед родителями, и перед родным краем. Вскоре женился на девушке по имени Рябинушка, и зажили счастливо, появились дети, а старики радовались их счастью и жили долго-долго.



*8. Семенова Г. М. Биҙәкле бағана [Рукопись] / Г. М. Семенова. - Каран : Каранская б-ка, 2017. - 14 б.*

## *Биҙәкле бағана*



Көн кискә ауышҡас, ҡояш, һыу өҫтөндә тирбәлеп йөҙгән уйынсыҡ шар төҫлө, һиҙҙермәйенсә Көнгәк тауы артына йәшенде. Иртән ҡалҡҡандан алып байығанға тиклем ҡайнар нурҙары ныҡ ҡыҙҙырғанлыҡтан, талғын ел иҫкәс, тын алыуы иркенләшә, ниндәйҙер еңеллек һиҙелә. Күптән ямғыр яумағанлыҡтан, сихри тынлыҡты боҙоп, туғай яғынан һыуға сарсап, таш кеүек ҡатҡан юлдан тыҡылдап сабышҡан ат тояҡтары, фурман арбаһының тимер таҫма менән уратылған ағас тәгәрмәстәренең дөңгөр-даңғыр тәгәрләгән тауыштары, дилбегә тотоп, арба ситенә баҫкан, быуындары ла нығынып өлгөрмәгән тырыш, үҫмер малайҙарҙың На-на-на, малҡай!, Әйҙә!, На-на!, ә ҡатын-ҡыҙҙың көлөшкән, өҙөп-өҙөп йырлашҡан, бесән арбаһы тегеләй-былай сайҡалған саҡта сар-сор иткәне ишетелә. Ауыл тыҡрығына килеп еткәс, кинәт, тауыштар юҡҡа сыҡҡандай була. Ҡара диңгеҙ кеүек, күпереп күне әйләнеп ятҡан йомшаҡ тупраҡтың туҙаны ҡара болот кеүек өҫкә күтәрелә, малҡайҙар яйлағас, тәгәрмәстәр сәкүшкәләренә, күсәргә тейеп шығырлай, аттарҙың бышҡырғаны, ҡатын-ҡыҙҙың сөскөргәне ишетелеп ҡала.

Күтәрелгән саң аша бер ни ҙә күренмәй. Ҡыҫҡа арба егелгән атта мөңгөр-мөңгөр һөйләшкән оло йәштәге ағай, аҡһаҡал бабайҙарҙың ауылға яҡынлашыуына, тал сыбығын ат итеп атланған бала-саға: «А-ана-а-а, ана бесәнселәр, ана-а-а ана кәбәнселәр ҡайта», - тип ҡыуанышып, һөрән һалып, егелгән аттарға ҡаршы йүгерешә. Тормош ауырлыҡтарын үҙ елкә-ләрендә күп татыған ил терәктәренең балаларға булған һөйөүе көслө, «Тр-р-р-тр-р-р», - тип иплəп кенә аттарҙы туҡтатып, ерҙә ялан аяҡ күп йөрөгәнлектән табандары сепейләп бөткән ыштанһыҙ бәләкәс малайҙарҙы алдарына ултыртып, йүгәнде тотторалар. Олатайҙары эште ышанып тапшырғас, малайҙарҙың түбәләре күккә тейә. Иртәнән алып ҡара кискә тиклем ир-аттың яланда эшләүе бер төрлө етемһерәп ҡалған ауылға йәм өҫтәй.

Өйҙәренә таралғас, мал хужалары аттарҙы туғарып, тышаулап, ауыл осондағы йәшел үләнгә сығара. Ә килендәр, көтөү ҡайтҡансы, киске ашты өлгөртөп, ғаиләһенә табын ҡора һалайым тип, аласыҡтарына ашыға. Әрем һепертке менән еүешләп һеперелгән ер иҙәнле һалҡынса аласыҡтың ҙур, киң

урындығына һуғылған аҫалы балаҫ, өҫтөнә ашъяулыҡ түшәлә. Иң түрҙә бәләкәй мендәрҙәр теҙелгән урын - ҡәҙерле ҡайны менән ҡәйнәгә, шунан хөрмәткә лайыҡ ғаилә башлығы атай һәм төпсөк бала, унан өлкәнерәк башҡа балалар һандуғастар кеүек теҙелә.

Әсәй кеше самауырҙы шажлатып еҙ батмусҡа ултырта, ухуат менән суйынды мейестән сығарып, тәмле еҫтәрен таратып бешкән ашты ғаилә ағзаларына «биссмиллаһ» ты уҡып, ғәҙел өлөштәргә бүлә. Ишле ғаиләгә сәйҙе яһап өлгөртөү ҙә оҫталыҡ, етеҙлек талап итә.

Бер аҙҙан тынлыҡты боҙоп, көтөүсенең сыбыртҡы шартлатҡан тауышы, көтөүҙең ауылға яҡынлашыуы ишетелә. Көнө буйы көтөүсенең маҙаһына тейгән кәзәләр иң алдан ауылға ҡарай йүгерә. Күпме генә ҡабаланһалар ҙа, бер кәзә лә ҡураһына ашыҡмай, ҡайҙа башы һыя, шунда тығылып, шатыр-шотор нимәлер кимерә башлай. Башҡа әмәл ҡалмаһа, алғы тояҡтарын күтәреп ҡоймаға таяна ла, ағасты эйеп, тамаҡ туйҙыра. Әйтерһең, уларҙы көнө буйы бикләп ас тотҡандар. Бер туктауһыҙ «Бә-бә-бә!» тип, ҡолаҡты яңғыратып, һарыҡ һәм бәрәстәре тауышы ишетелә. Башҡа малды ҡаршылау, һыйыр һауыу, һөт айыртыу, быҙау эсереү - тауыҡ сүпләһә лә бөтмәҫ ауыл тормошондағы мәшәҡәтле, күңелле эштәр теҙелә.

Ауыл уртаһындағы тыҡрыҡтан урамға килеп ингәс, һыйыр малы һәүетемсә яйлап баҫып икегә бүленә - теге яҡ ос һәм был яҡ ос тоҡолар.

Уң яҡҡа боролған һыйырҙар ауылдың Ағинәй ҡапҡаһы төбөнә туктарға ниәтләй, сөнки унда йәм-йәшел ҡаҙ үләне, үҙе бер сәхрә. Ҡарсыҡ ашыҡмай ғына: Һәүкәшкәйҙәр, һәш-һәш, ҡайтығыҙ инде, елендәрегеҙ һыҙлайҙыр, - тип, малдарҙы өйҙәренә ҡарай йүнәлтә.



Ағинәй йорто алдында, ҡапҡа төбөндә күҙ ҡараһы кеүек үҫтереп һаҡлаған, йәшел хәтфә үләне өсөн борсола. Борсолорлоҡ та шул, тирә-яғын түңәрәк күл уратып алған ауылдың ҡап-уртаһында тирмәгә оҡшаған, эсле-тышлы балсыҡ менән һыланған, аҡ балсыҡ менән ағартылған ситән өй, бәләкәй булыуына ҡарамаҫтан, күркәмлеге, ҡотлолоғо менән айырылып тора, әллә хужабикәһе Ҡотлобикә булғанға, исеме есеменә тура киләме.

Өйҙөң башы һалам менән ябылһа ла, заманына күрә ғәҙәти күренеш кеүегерәк, яңғыҙ әбейҙең өйөнән көлгән кеше һиҙелмәне.

Күрше ҡыҙы Илһөйәрҙең генә ошо инәйҙең өй ҡыйығын башҡа берәй нәмә менән ҡаплаһаң, әкиәттәге кеүек бигерәк матур булыр ине, тип бәләкәй йөрәге һыҡтаны.

Ике һуғыш һынауын, тормоштоң әсеһен-сөсөһөн үҙ елкәһендә татыған ҡарсыҡтың йорто ир-ат йәшәгән өйҙәрҙән ныҡ айырыла ине. Бала саҡтан сынығып, аслыҡҡа ла, һыуыҡҡа ла бирешмәй, ишле ғаиләләрҙән ҡалышмай йәшәгән намыҫлы инәйҙең ситәндән үрелгән ҡойма, балалар һыйырлыҡ ҡына төрлө тар, йоҡа таҡталарҙан үҙе ҡағып эшләгән, келә урынына ойоҡ ҡунысын бәйләп ҡуйған ҡапҡаны асып инһәң, әйтерһең, мөғжизә яланы.

Урамға ҡараған ике бәләкәй тәҙрә төбөндә аллы-гөллө яран гөлдәре үткән һәр кешенең иғтибарын йәлеп итә. Беҙгә нисек күҙ һалмай үтәһегеҙ? - тигән төҫлө күҙҙәрҙе ҡамаштыра.

Ишек алды яғына ҡараған бәләкәй тәҙрәнән төрлө төҫкә буялған йөн ептәре уралған йомғаҡтар күренә. Тимәк, матур балаҫтарҙы бында һуғалар. Тышҡы ишектән ситән соланға ингәс, таҙалыҡ күҙгәташлана, һәр бер нәмә - үҙ урынында. Ә урта ишек, әйтерһең дә, өйгә әйҙәй, ысынлап та үҙенсәлекле әкиәт һарайындағы хазина ҡаласығы көтә. Һәр ваҡыт һап-һары итеп ҡырып йыуылған таҡта иҙәнгә баҫырға ҡыймай тораһың. Әремдән бәйләнгән һепертке лә, саф еҫтәрен бөркөп, үҙ урынында.

Ә өйҙөң уң яғында-балаҫ һуға торған ҡорамал. Төҫлө ептәр тараҡ кеүек тештәр аша тигеҙ итеп үткәрелгән. Күҙҙәре насар күреү сәбәпле: Ҡыҙым ептәрҙе үткәреп бир әле, - тип Илһөйәрҙе саҡыра. Ҡыҙҙың да, бәләкәй бармаҡтары менән теҙәһе урынға, яңылышып ҡуйған саҡтары булғылай. Инәй асыуланмай, тыныс ҡына:

- Рәхимә килендең ошо ҡыҙын бигерәк яратам инде, бәхетле булһын, - тип, сөйәлләнгән ҡулдары менән һары сәсле ҡыҙҙың башынан һыйпай.



Тәҙрә аша күҙ ташлаһаң, стеналарҙа эленгән нағыштар өйгә сихри матурлыҡ бирә. Түрҙәге урындыҡтың ситтәре сигелгән япма менән биҙәлһә, өҫтөндә төрлө төҫкә буяп һуғылған аҫалы балаҫ күҙҙең яуын ала.

Урындыҡтың уң яҡ мөйөшөндә бәләкәй йоҙаҡ эленгән ағас һандыҡ. Әммә был һандыҡта нимә һаҡланыуын берәү ҙә белмәй, сөнки ул кеше алдында асылманы.

Ауылда әбейҙең һандығы тураһынд имеш-мимеш йөрөһә лә, нимә ятҡаны сер булып ҡалды.

Шуның өсөн ауыл халҡы уны «Серле һандыҡ» тип атаны. Уның өҫтөндә ҡунаҡтар өсөн тәғәйенләнгән затлы ҡаралты.

Иң аҫта-һарыҡ йөнөнән эшләнгән түшәк, һырылған юрған, мендәрҙәр. Улар сигелгән япма менән ябылған, зауыҡлы итеп йыйыштырылған. Түр баштың һул яҡ мөйөшөндә көн дә тотоноу өсөн һауыт-һаба, башҡа кәрәк-яраҡ. Ишектән ингәс, өйҙөң һул яғында урын алған, ҡуян тәпәйе менән ағартылған ҙур мейестән арыш икмәге йәки балан, муйыл, ер еләге бәлештәренең еҫе танауҙы ҡытыҡлай. Ә мейес алдында һабантуйҙағы баҡанды хәтерләткән үҙенсәлекле серле бағана өрлөктө күтәртеп, өйгә нур һибеүсе бер мөғжизә булып тора. Инәй осраған бер матур кәнфит ҡағыҙҙарын шул бағанаға йәбештереп күңеленә, күрәһең, йәм таба.

Өйҙәрендә ошондай биҙәкле бағананың булмауы, Илһөйәрҙең бер аҙ күңелен төшөрә ине. Усаҡ өҫтөндәге ҡаҙанда һыу ҡайнай, бәләкәй һикелә ҙур ағас тәпән, ҡайын туҙынан эшләнгән һауыт-һабаның береһендә бал булһа, икенсеһендә - кәзә һөтө, ҙурыраҡ туҙ һауытта - тәмле, әскелтем еҫтәре таралған ҡомалаҡ сүпрәһе.

Күп балалы Рәхимә йыш ҡына ҡыҙын йомшай:

- Ҡыҙым, тиҙ генә Ҡотлобикә инәйеңдән сүпрә алып ҡайт. Икмәк әсетергә ҡуйырға кәрәк. Ҡотло ҡуллы әбейҙең сүпрәһе икмәкте уңдыра.

Бала һынаулы ҡараш ташлап:

- Әсәй, ә он ни өсөн? - ти.

- Балам! Буш һауыт менән йөрөмәйҙәр. Берҙән, икмәк уңмаҫ, аҙ булһа ла сүпрә ҡайнатҡаны өсөн ярҙам булыр. Уңған сүпрәһенә күҙ теймәһен, ҡулының ҡото китмәһен, бар, балам, ашыҡ!

Һары сәсле ҡыҙ, әлбиттә, Ҡотло инәйгә ашығып бара. Йомарт әбей бызырлаған сүпрәһен генә түгел, тәмле кәнфитен дә йәлләмәй.

- Ҡыҙым, ризыҡты тәтәй, уң ҡулың менән ал, икмәгең дә, юлың да, бәхетең дә уңыр, - тип киҫәтә.

Тәмлекәстәрҙе усына йомоп, ялбыр сәсле ҡыҙ мөғжизә яланы - йәшел ҡаҙ үләне менән ҡапланған ихатаға, ситәндән үрелгән ҡоймаларға һоҡланып ҡарай. Өйҙән ситтәрәк кәзә-һарыҡ өсөн ситән һарай урынлашҡан. Үлән араһынан тар һуҡмаҡ урамға алып сыға. Өй алдында ҡойоһо булмаһа ла, эшһөйәр ҡарсыҡ, күршеләренән көйәнтәләп һыу ташып, емеш-еләк, йәшелсә, аллы-гөллө сәскә үҫтерә. Тар һуҡмаҡ оло урамға алып сыға.

Ҡапҡаның һул яғында - оҙон эскәмйә, бәләкәй өйҙө йәмләп, ауыл ҡото ҡуш тирәк үҫә. Урам йәшел бәрхәт менән ҡапланған. Иртәнсәк ауыл көтөүе китеүгә инәй селек һеперткеһе менән үҙе әйтмешләй Абхуд яһай.

Ҡояш күтәрелеүгә ҡатын-ҡыҙ кемуҙарҙан эшен тамамлап, бала саға йоҡоларын бөтөрөп, ошо ҡуш-тирәк күләгәһенә, ашыға. Ҡатын-ҡыҙ ойоҡбаш, шәл бәйләй, кемдер яңылыҡтарҙы иғтибар менән тыңлай. Ҡотлобикә инәйҙән рөхсәт алғас, бала-саға «Үлән тешләш» уйынын уйнай.

Парланып алғас, балалар бәләкәй түбәтәй кеүек ерҙе биләй ҙә, үләнде түңәрәкләп йолҡа. Ә бер бала күҙен йомоп тора. Иптәше үләнде теше менән өҙөп ала ла, тел осондағыһын күрһәтмәй. Тегеһе бик иғтибар менән эҙләй һәм ҡайһы үлән тешләп алынғанлы ғын әйтергә тейеш була. Шунан сағыштырып ҡарайҙар. Был уйын иғтибар, етеҙлек талап итә.

Ул ялҡытҡас, эскәмйәлә теҙелгән тамашасыға йырлап, бейеп һөнәр күрһәтәләр, аҙаҡ «Аҡ тирәк, күк тирәк» уйыны башлана.

Ҡул эше эшләп, бармаҡтары талған оло инәйҙәр ҙә ҡушылып уйнағас, бигерәк күңелле.

Күрше әбей Илһөйәргә йыш ҡына:

- Ҡыҙым, килеп китерһең әле, теге-был эштәрем йыйылған, һинең ярҙамың кәрәк, - ти.

Эштән, бигерәк тә, теңкәһенә тейгән яңғыҙлыҡ ялҡыта.

- Ҡыҙым, түрҙән үт, башта икәүләп сәй эсеп алайыҡ. Эш ҡасмаç ул, - тип һүҙ башлай. Шул һүҙҙе көткәндәй ҡыҙ:

- Әйҙә инәй, мин сәй ултырта торам, - тип ашъяулыҡты түшәй һала. Түңәрәк тимер һауытта тәмле кәнфиттәр барлығын белә ул. Шунан тәмләп-тәмләп сөкөрләшеп сәй эскәс, бағанаға тағы ла биҙәктәр өҫтәлә. Бәләкәй ҡыҙ күрше инәйҙән ҡайтҡан һайын атаһынан өйҙәренең мейес алдына бағана ҡуйыуын үтенеп һорай, тик атай кеше ундай бағананың өйгә кәрәкмәгәнен аңлата.

Ә Илһөйәрҙең күрше инәй кеүек бағананы биҙәгеһе килә әлбиттә. Ҡотлобикә инәй һары сәсле ҡыҙҙы иртәгәһен тағы ла иҙән йыуырға саҡырҙы. Иҙән тап-таҙа булһа ла:

- Ҡыҙым, әҙерәк саңланған, еүешләп һөртөп бир инде, - тигәс, ҡыҙ сәмләнеп эшкә керешә. Тик ике күҙе теге биҙәкле бағанала . Бөгөн ул бигерәк тылсымлы тойола. Ялтыр-йолтор кәнфит ҡағыҙҙары йәбештерелгәс, ҡыҙ әллә ҡарсыҡ төнө буйы теге тәмле кәнфиттәрҙе ашаймы икән, тип уйлап алды.

Иҙән йыуған арала теге матурлыҡ бағанаһынан бер нисә кәнфит ҡағыҙын ҡуптарып алып, Илһөйәр кеçәһенә һалды. Өйгә ҡайтҡас, мейесте булһа ла матурлаясаҡ, йәнәһе. Инәй ҙә бөгөн бик сәйер.

- Ҡыҙым, сәйҙе һуңынан эсербеҙ, - тигәс, ҡарсыҡ урлағанды һиҙҙе, тигән уй башына килде.

Уңайһыҙ хәлдә тотто үҙен, теге бағана ла ҡыҙға ҡарап тик торған һымаҡ, матур ҡағыҙҙар алынған урын буш, яманһыу булып тора.

Илһөйәрҙең намыçы борсоно, әбей сыҡҡан арала кеçәһенән ҡағыҙҙарҙы алып бағанаға йәбештереп ҡараны, тик йәбешмәйҙәр. Ә инәй нимә менән, нисек йәбештерҙе икән? Өй йыйылды, иҙән йыуылды. Бына соланда аяҡ

тауыштары ла ишетелде. Ҡыҙҙың ҡото осто, хәҙер теге бағананы күрһә, нимә тип әйтәсәк? Оятһыҙ, ҡараҡ, бур, уғры тип әйтерме? Ҡурҡыныс, йәбер һүҙҙәре башында ҡайнаны. Башҡа әмәл ҡалмағас, ҡурҡышынан ҡыҙ урындыҡ аҫтына инеп йәшенде. Ҡотло инәй һалмаҡ ҡына баҫып өйгә инде:

- Ай, рәхмәт төшкөрө, өйөм яҡтырып киткән, - тип ҡыуанды.

Әбейҙең һәр аҙымы йәшенле ямғыр кеүек ҡыҙ өсөн ҡурҡыныс тойолдо. Ҡарсыҡ ҡулдарын йыуып урындыҡ өҫтөнә ашъяулыҡ түшәне, тәм-томдарын Илһөйәрҙең баш өҫтөнә ҡуйҙы ла, мейес алдында утлы ҡуҙ өҫтөндә ҡайнап ултырған сәйнүкте көлдөксәнән алып, һабыр тауыш менән:

- Әйҙә, ҡыҙым, сәй эсәйек, - тине. Ҡыҙҙың бәләкәй йөрәген нәмәлер сәнсеп үтте, ниндәй оят, кәнфит ҡағыҙҙарын рөхсәтһеҙ алды. Шулай ҙа иртәме, һуңмы ҡыҙға урындыҡ аҫтынан сығырға тура килде. Ҡарсыҡ аяҡтарын бөкләп ултырғанда, тешһеҙ ауыҙы менән нәмәлер сәйнәп маташа ине. Бер ни булмағандай:



- Ҡыҙым, ҡулыңды йыу ҙа, ултыр, сәйең һыуына, - тигәс, ҡыҙ ҡомған алып, түңәрәк еҙ таста ҡул йыуғанда, инәйҙең һүҙенә генә түгел, хатта һәр һулышына иғтибар итте. Оло кешенең күкрәгенән һыҙғырып-ғыжылдаңҡырап һулаған тыны ҡыҙҙа шик тыуҙырһа, әбей сынаяҡтарға боҫон борҡотоп, сәй яһауын белде.

Ә теге матур бағана ҡыҙға ҡарап торған һымаҡ: Хужабикә инәй, һинең кәнфит ҡағыҙҙарыңды ошо һары сәсле ҡыҙ алды, - тип әйтер кеүек. Әлбиттә, ҡурҡып эскән сәйҙең тәме лә табылманы. Инәй көндәгесә матур һүҙҙәр һөйләп, кеткелдәп көлөп сәй менән һыйлауын дауам итте. Хәҙер был өйҙән нисек сығып китергә тигән уй борсой башланы. Ҡыҙҙың уйын һиҙгәндәй:

- Балам, рәхмәт һиңә, өйөмдө йыйыштырҙың, бына һиңә күстәнәс, тағы ла кил, - тип, ыҡсым итеп ҡулъяулыҡҡа уралған бәләкәй төйөнсөк тотторҙо, - Тик өйгә ҡайтҡас асырһың, - тине.

Эт күңеле бер һөйәк тигәндәй, баланың ҡыуаныстан түбәһе күккә тейгәндәй:

- Рәхмәт, Ағинәй, - тип ишеккә ҡарай уҡталды.

- Туҡта! Ҡыҙым! Рәхмәт кенә аҙ, - тигәс, ҡыҙҙың аяҡтары дер ҡалтырай башланы.

- Әйтәһе һүҙемде оноттом, - тине.

Намыҫлы ҡыҙ ҡурҡышынан - «Мин - мин», тип әйтергә иткәйне, башына «Ғәфү ит, инәй!» тигән тылсымлы һүҙ иҫенә төштө һәм бәләнән ҡотҡарғандай булды.

Ағинәй ҡыҙҙы хәлһеҙ ҡулдары менән ҡосаҡлап, күкрәгенә ҡыҫып башынан һыйпап:

- Ҡыҙым, әле бәләкәйһең, шулай ҙа кешенең әйберен бер ваҡытта ла рөхсәтһеҙ алырға ярамай! - тип, мәңгелеккә һабаҡ бирҙе.

Ғәфү үтенеп ҡыҙ өйөнә ҡарай йүгерҙе. Бигерәк сәйер күренгән төйөнсөктә нимә бар икән? Тиҙ генә өйгә инеп, йоҙроҡтай төйөнсөктө күкрәгенә ҡысты, бер аҙ торғас, асып ҡарарға ҡыйыулығы етте.

Унда күҙҙе ҡамаштырған төрлө-төрлө, матур, ялтыр-йолтор кәнфит ҡағыҙҙары ине. Ҡыҙҙы күрше әбейенең шул тиклем йомарт булыуы һоҡландырҙы, аралары тағы ла яҡынайҙы. Күп тә тормай ҡарсыҡ ситән ҡойма аша:

- Ҡыҙым, бөгөн миңә йоҡларға килерһең, - тине.

Кис етте, бергәләп сәй эскәс:

- Ҡайнар самауырҙы үҙем алам, һин һауыт-һабаны йыу, - тине. Шунан, бөртөкләп йыйыла алтын тигәндәй, ашъяулыҡтағы икмәк валсыҡтарын йыйып алып, икмәкте иҙәнгә төшөрөп тапарға ярамағанлыҡты, быаның ҙур гөнаһ икәнлеген, аслыҡ - оло афәт, фажиғә икәнлеген киҫәтте.

Ауыр итеп уфтанып алғас, урындыҡҡа ҡәҙерле ҡунаҡтар өсөн һаҡлаған кейеҙ түшәген йәйҙе, үҙенә ҙур мендәрҙе саҡ килтереп һалғас:

- Был яҫтыҡ - миңә, һиңә, ҡыҙым, бәләкәйерәк мендәр. Бер юрған беҙгә етер, балалар асыҡ ятырға ярата, өйөм һалҡын, өшөрһөң, - тине.

Шунан аяғын йыуҙы, эске күлдәген кейҙе, ағарған сәстәрен ыҫпайлап тараны, сәс остарына балалар кеүек таҫма ҡушып үрҙе, аҡ яулығын ябынды, урындыҡтағы балаҫ аҫтын ҡулы менән буйлатып эҙләнә торғас, асҡыс алып теге серле һандыҡты асты.

Сигелгән ҡулъяулыҡта ҡәҙерләп төрөлгән әйберҙе сығарып, ҡалтыранған ҡулдары менән итәгенә ҡәҙерле төйөнсөкте һалды ла, уҡына-уҡына аса башланы.

- Ғүмерем буйы көттөм… Һин ҡайҙа? Хәбәрһеҙ юғалды - тигән һүҙҙәрҙән башҡа бер ни ҙә, белмәйем. Эй, Хоҙайым, минең шул тиклем көтөүҙәремә лә ҡайтманың шул.

Өсмөйөшлө хаттарҙы рәнйетеп ҡуймайым тигән төҫлө, теге сигелгән ҡулъяулыҡҡа кире төрөп һандығына бисмиллаһын уҡып һалды. Үҙ алдына һөйләнә-һөйләнә, түңәрәк батмусты тәҙрәгә ҡуйып, тирә-яғын бәләкәй мендәрҙәр менән ныҒытты.

Ҡыҙҙың һынаулы ҡарашына:

- Ел өрөп, һалҡын теймәһен. Ҡара көстәр тимергә ҡағылырға ҡурҡа ул, - тип өҫтәне.

Ағинәйҙең эргәһенә ятып, матур-матур әкиәттәрен тыңлап, йоҡоға талыу ҡыҙ өсөн бер бәхет ине. Шулай итеп, көн артынан көндәр үтә торҙо.

Яҙ-балалар өсөн бигерәк күңелле мәл. Күләүектә боҙ ватыу, бәләкәй йылғаларҙа ҡағыҙҙан яһалған кәмә йөҙҙөрөү тиһеңме, тау баштары ҡарҙан

асылғас, йыуа, ҡаҡы йыйыу, ер өҫтө әҙерәк кипкән урындарҙа сәкән һуғыу уйындары, сепрәктән тегелгән туп менән уйнау, һыйыр йөнөнән туп яһау балаларҙың кәйефен күтәрә, икенсе яҡтан, уларҙың һаулығы нығына.

Ә ҡыҙҙар балсыҡтан, тупраҡтан төрлө «бәлеш» яһап, уларҙы яңы үҫеп килгән үлән менән биҙәй, ағастан йә сепрәктән үҙҙәре яһаған ҡунаҡтарҙы һыйлай, балалар ниндәйҙер кимәлдә тормошҡа әҙерләнә. Илһөйәрҙең өйө артында, ҡояш нығыраҡ йылытҡан урында, ҡар ирегәс, ҡыҙыл балсыҡ, мәте күренә. Бәләкәй устарына һалып, төрлө икмәк, бәлештәр яһай ҙа кирбестән үҙе эшләгән мейескә ултырта, ҡунаҡтарын саҡыра. Ҡабаланып урамға йүгерә. Әлбиттә, Ағинәй түрҙә булырға тейеш, шунан ҡаршыла йәшәгән әбей, тағы ла ауылдағы күңеленә оҡшаған Сабира, Сәлимә, Миңлекәй һәм башҡа инәйҙәрҙе тиҙ генә ҡунаҡҡа саҡырып килә.

Ағинәйҙәр, күп көттөрмәй, матур-матур күлдәктәрен, күҙҙең яуын алып торған яулыҡтарын, ап-аҡ ойоҡтарын һәм тәрән, ялтлап торған галуштарын кейеп, өйгә йыйыла. Илһөйәрҙең әсәһе тап ошо ваҡытта үҙенең ғаиләһе өсөн төшкө ашҡа тауыҡ һуйҙырып, йолҡоп ултыра.

Матур инәйҙәр берәм-берәм түргә уҙа, ә хужабикә был хәлгә аптырашҡа ҡала. Талдағы һандуғастар кеүек теҙелеп ултырған ҡунаҡтар эштең низә икәнен һиҙгәндәй,күрше инәй ипләп кенә һүҙ башлай:

-Килен, асыуланма инде, ҡыҙың мейестә икмәк, бәлештәр бешеп ултыра тигәс, ышанып килдек, - тиҙәр.

Рәхимә, йолҡоп ултырған тауығын ситкә ҡуйып, көлөргә лә, иларға ла белмәй. Бәләкәй ҡыҙҙың уйнап саҡырыуын төшөнгәс, алданған әбейҙәр бер-береһенә күҙ ҡыҫышып, көлөшә.



Шулай ҙа, киң күңелле килен тиҙ генә өҫтәл ултыртып, саҡырылған ҡунаҡтар менән көлөшә-көлөшә сәй эсә. Бер нисә көн үткәс, ҡыҙҙың әсәһе, ысынлап та,

Илһөйәр кеүек, тәмле бәлештәр бешереп, теге матур, затлы күлдәкле әбейҙәрҙе ҡыҙына саҡырырға ҡушты.

Өй һайын йүгереп йөрөп, әсәһе ҡушыуы буйынса тәғәйенләнгән ҡунаҡтарҙы саҡыра. Бер алдан-ған әбейҙәр Илһөйәрҙән Ысын саҡырамы?, - тип ҡат-ҡат һорайҙар. Ҡыҙ, әлбиттә, ысын, әсәйем ҡушты, тип өҫтәһә лә, ҡарсыҡтар ашыҡмай, әйткән ваҡытҡа килеүсе юҡ.

Күпме борсолоп әҙерләнгән хужабикә: «Шоғайып бабайым әйтмешләй, саҡырып ҡунағың килмәһә, ауырып ҡатының үлмәһә

ҡыйын тип, дөрөҫ әйткән», - тип һөйләнде. Илһөйәр үҙенең ғәйебен шунда ғына аңланы.

Әсәйемдең иртә таңдан тороп, көнө буйы бешеренеп әҙерләнеп, ҡунаҡтары килмәгәненә тик мин генә ғәйепле, тип уйланы.

Кешене бер алдаһаң, ул һиңә ышанысын ғүмерлеккә юғалта икән. Был ваҡиға ҡыҙға бер ваҡытта ла алдамаҫҡа тигән һабаҡ бирҙе. Йылдар үтә торҙо. Ағинәй биргән һабаҡтар Илһөйәргә һәр ваҡыт тормошта ярҙам итте.

Киң күңелле, йомарт инәй, ауылдың хөрмәтле кешеһе булараҡ, оҙаҡ йәшәне. Илһөйәр өсөн яратҡан инәһенән, фәһемле кәңәштәренән, ҡыҙҙың әҙәпле, тәртипле булып үҫеүендә ҙур өлөш индергән фәрештәнән айырылыуы бигерәк ауыр булды.

Ауыл халҡы, Ағинәйҙе хөрмәтләп, һуңғы юлға оҙатты. Бөгөн дә уны һағынып иҫкә алалар.

Ә Илһөйәрҙең күҙ алдында инәйҙең ыҡсым өйө, мейес янындағы биҙәкле бағана һаман да нур бөркөп тора.

## *Разукрашенный столб*

Вечерело. Солнышко, подобно игрушечному шару, качающемуся по воде, незаметно спряталось за гору Кунгак. После обжигающих лучей, которые грели землю с раннего утра до позднего вечера, подует прохладный ветер, дышится хорошо, чувствуется во всем теле какая-то легкость. Давно уже не было дождя. Нарушая волшебную тишину, слышатся топот лошадей, которые едут по каменистой дороге, стук колес от телег, коими управляют подростки, понукая лошадей, смех женщин, возвращающихся с сенокоса, их песни. Дойдя до деревни, голоса стихают.

В воздух поднимается облако черной пыли, и, когда лошади замедляют шаг, слышится их фырканье. Из-за черной пыли ничего не видно. Когда к деревне приближаются подводы с аксакалами, дети, увидев их, радостно кричат: «С сенокоса едут!» и бегут на встречу. Пожилые люди, которые на своих плечах вынесли все тяготы жизни, с любовью относятся к малышам, останавливают коней, сажают к себе на колени босоногих полуголых детишек, дают им вожжи. Мальчики от порученного дела на седьмом небе от счастья. Возвращение мужчин, работающих на поле весь долгий день, оживляет осиротевшую за день деревню.

Вернувшись домой, хозяева в первую очередь распрягают лошадей, и, стреножив, выпускают пастись на зеленую травку на окраине села. А невестки, торопясь, чтобы до прихода стада накормить семью, начинают в

летней кухне готовить ужин. Сначала подметают земляной пол влажным веником из полыни, потом стелют на домотканый узорчатый палас скатерть.

На самом почетном месте - маленькие подушки, где восседают бабушка и дедушка, глава семьи, а потом уже устраиваются как птенчики детишки.

Мама ставит на медный поднос кипящий самовар, из печи вытаскивает чугунок с издающим вкусный запах супом, прочитав молитву, разливает суп по тарелкам. Большую семью надо напоить и чаем – это тоже требует умения, ловкости. Слышно, как пастух щелкает кнутом, - это стадо приближается к деревне. Впереди всех бегут козы, которые целый день заставляли бегать за ними пастуха. Вроде бы и спешат козы, но возвращаться в свое подворье не торопятся, суются везде и что-то грызут, или приподнимаются на задних лапах и лакомятся ветками деревьев, опираясь на забор, как будто целый день их не кормили. Не переставая кричат овцы и ягнята. Надо встретить корову, подоить, пропустить молоко – это каждодневные, бесконечные, но вместе с тем и веселые заботы сельчан.

Когда коровье стадо возвращается, постепенно меняет свое направление: какая-то часть идет в верхнюю часть села, а другая - в нижнюю. Некоторые коровы останавливаются у дома Агиняй, где много пышной зеленой травы. «Коровушки, возвращайтесь домой, у вас вымя полное молока», - уговаривает их почтенная бабушка. Бабушка очень дорожит этим зеленым ковром у дома. Избушка ее, построенная из плетня, обмазанная глиной и побеленная, выделяется своей аккуратностью и какой-то необъяснимой прелестью. Бабушку зовут Котлыбика. Дом покрыт соломой, и это не вызывает ни у кого удивления. Только соседская дочь, Ильсияр, переживала, что у бабушки избушка выглядит бедно, надо бы крышу заменить, - думала она.

Действительно, избушка у одинокой бабушки, пережив две войны, резко отличалась от домов, где хозяйничали мужчины. Закаленная с детства, перенесшая и голод, и холод, живущая честным трудом, бабушка построила сама плетень, сделала калитку, а откроешь ее, войдешь во двор – и как будто попадешь в поле чудес. Из двух маленьких окошек выглядывают яркие цветки герани. Из другого окошка видны разноцветные клубки шерсти.

Значит, бабушка ткет из них яркие шерстяные ковры. Избушка поражает своей чистотой, аккуратностью. Полы скобленые изжелта, боишься наступить на половицы. Веник из полыни издает душистый запах. А дальше расположен ткацкий станок. Разноцветная шерсть ровно пропущена через гребень станка. Глаза у бабушки плохо видят, поэтому она часто зовет Ильсияр, чтобы помогла пропустить нити. Иногда маленькие пальчики Ильсияр путают нити. Бабушка не сердится, мозолистыми руками гладит

русоволосую голову девочки и говорит, что любит ее. Стену украшают, дают волшебный вид вышивки. Лежанка украшена по краям вышитым покрывалом, а на ней дивной красоты палас. На правом углу маленький деревянный сундучок. Никто не знает, что там хранится - при посторонних бабушка не открывает его. Так и прозвали его «волшебный сундук». Тут же находятся одеяла, перины из овечьей шерсти, подушки - они покрыты вышитыми накидками. В левом углу - домашняя утварь, посуда.

Большое место занимает побеленная заячьей лапой печь, откуда пахнет или пирогами из разных ягод, или свежеиспеченным хлебом. А перед печкой - узорчатый столб, который подпирает потолок, и как будто излучает волшебный цвет - бабушка оклеивает их конфетными обертками. Ильсияр тоже хотела бы иметь у себя такой столб.

В котле все время кипит вода, на скамье большая деревянная бадья, в березовых туесах находится мед, вдругом - козье молоко. В большом туеске находятся дрожжи, за которыми многодетная Рахима часто посылает Ильсияр.

- Из ее дрожжей получается вкусный хлеб, - говорит мама дочери

- Мама, а зачем ты даешь мне муку?

- С пустой посудой за дрожжами не ходят. Ведь дрожжи готовят из муки и из хмеля. И бабушке поможем, и хлеб вкусный будет.

Русоволосая девочка спешит к бабушке. Щедрая бабушка дает ей не только дрожжи, но и вкусную конфетку.

- Бери еду правой рукой и хлеб будет вкусный, и счастье прибудет, - поучает бабушка.

Девочка восхищенно смотрит на зеленый двор, на самобытный забор. Неподалеку от дома построен сарайчик для коз и овец. Хотя во дворе нет колодца, бабушка носит ведрами воду для полива овощей, цветов. Узкая тропинка выводит на улицу. Налево – узкая длинная скамья, рядом растет, украшая двор, тополь. Улица покрыта зеленым ковром. Утром бабушка выносит метлу и, как сама говорит, делает «обход».

К обеду у женщин дела утренние завершены, дети выспались, и все собираются к бабушкиному плетню. Кто-то вяжет шаль, носки, кто-то выслушивает новости. С разрешения бабушки дети приступают к играм. Особенно им нравится игра «откуси траву». Дети выбирают небольшой кусок травы, убирают траву, а один из детей стоит с закрытыми глазами. Другой ребенок зубами откусывает траву, а водящий должен найти, где откушенная трава. Игра требует внимания, сноровки. Перед женщинами, которые сидят на скамейках, поют, танцуют. Иногда уставшие женщины

тоже присоединяются к танцам. Наиболее у детей популярна игра «Ак тиряк, кук тиряк».

Часто бабушка приглашает к себе Ильсияр, хотя говорит, что ей понадобилась помощь, понятно, что тяготит ее одиночество.

- Приходи, дочка, попьем чаю, работа не убежит, - говорит девочке.

- Ладно, бабушка, я помогу, - начинает стелить скатерть Ильсияр.

В круглой железной вазочке всегда вкусные конфеты. Напьются чаю - на столе появляются новые блестящие бумажки от конфет, и они оклеивают ими столб. Каждый раз, возвращаясь от бабушки, девочка просит отца поставить ей такой же столбик, но ей объясняют, что нет надобности – ведь дом новый!

На следующий день бабушка снова позвала Ильсияр и попросила помыть полы, хотя они были чистые.

- Пыль на них надо протереть влажной тряпкой, - говорит она. Работает девочка и, не отрываясь, смотрит на блестящий столб.



- Неужели бабушка всю ночь ест конфеты?, - думает она. Пока мыла полы, оторвала от столба несколько красивых бумажек, положила в карман и подумала, что прилепит их на печку. Бабушка тоже вела себя странно, неужели заметила?

- Чаю потом попьем, - сказала бабушка.

Кажется и столб смотрит на девочку, ведь место от фантиков пустует. Ильсияр стало совестно, вынула бумажки из кармана, пока бабушка отсутствовала, хотела приклеить обратно, а они не прилипают. А как же бабушка их приклеила? Уборка закончилась, полы вымыты. В сенях послышались шаги. Ильсияр перепугалась и спряталась под нары. Вдруг бабушка заметит пропажу и назовет ее воровкой? Войдя в избу, бабушка радостно воскликнула: «Ай, как посветлело в комнате, спасибо!». Каждое слово бабушки отдавалось в голове как удар грома. А бабушка, вымыв руки, постелив скатерть, выставила угощение, сняла кипящий чайник с угольев и позвала пить чай. Пришлось выйти из укромного места и приступить к угощению.

Бабушка что-то жевала беззубым ртом. Как ни в чем не бывало, она предложила чаю. Когда Ильсияр мыла руки в медном тазике, обратила внимание, как с трудом переводит дыхание бабушка. А тут еще красивый столб как будто спрашивает, кто взял бумажки от конфет. От страха Илсияр не почувствовала вкуса конфет и чая. Бабушка как всегда радушно угощала,

поблагодарила ее и передала небольшой сверток, наказав, чтобы не открывала до дома.

- Спасибо, бабушка!

- Постой, доченька, этого мало!

У девочки от страха ноги подкосились. Хотела признаться, но промолвила лишь извинения. Бабушка слабыми руками обняла девочку и объяснила, что без спроса чужое брать нельзя – и этими словами преподала ей урок навеки.

А что в свертке? Прибежав домой, через некоторое время осмелилась осмотреть сверток и обнаружила много блестящих ярких фантиков. Девочку очень обрадовал этот подарок. Через несколько дней бабушка пригласила Ильсияр ночевать. После чая Ильсияр вымыла посуду. Бабушка объяснила ей, что со стола нужно собрать все крошки. «Хлеб надо беречь» - эту мысль она внушила девочке. После ужина постелила себе и девочке. Перед сном вымылась, расчесала волосы, заплела, накинула на голову белый платок и достала откуда-то маленький ключик. Этим ключом открыла тот заветный сундучок. Достала вышитый платочек из сундучка, дрожащими пальцами развернула и зашептала про себя:

- Всю жизнь ждала…

- Где ты? Только получила извещение, что пропал без вести…

Сложила дорогие треугольники фронтовых писем и бережно положила в сундук. Потом взяла круглый поднос, поднесла к окну, обложила маленькими подушками, объяснив, что черные силы боятся металлических предметов, да и из окна не будет дуть. Девочке очень нравилось засыпать возле бабушки под ее напевные сказки.

Вот и весна настала – любимая пора для детворы. То пускали в ручейках и лужах бумажные кораблики, собирали съедобные растения, играли в **меч,** сделанный своими руками из тряпок или из коровьей шерсти. Девочки тоже находят себе занятие. Из глины делают пироги, украшают их свежей зеленью и зовут «гостей». У Ильсияр снег за домом быстро растаял, показалась красная глина. В маленьких ладошках приготовлены разные «выпечки».

Сейчас нужно пригласить гостей. Конечно, в первую очередь, свою любимую Агиняй, потом уже Сабиру, Салиму, Миникай (так зовут остальных бабушек). Бабушки скоро появились у Ильсияр дома в своих красивых платьях, платках, а на ногах у них блестящие галоши. Мама в это время щипала курицу, готовя обед для своей семьи. Она была удивлена тем, что бабушки без приглашения явились в гости. Бабушка, живущая по

соседству, сказала, что ее дочь пригласила их в гости. Хотя и растерялась, радушная хозяйка усадила их за стол, угостила чаем.

Через несколько дней мама решила пригласить этих бабушек в гости. Наготовила пирогов, приготовила угощения и отправила дочку с приглашением к бабушкам. Но те не торопились в гости, им показалось, что их опять разыгрывают. Мама объяснила дочери ее вину. Ильсияр видела, как мама готовилась к приему гостей, а те в назначенный час не явились.

Все эти уроки Ильсияр запомнила на всю жизнь: что, раз солгав, человек теряет доверие окружающих. Почтенная, уважаемая всеми бабушка прожила долгую жизнь. Трудно было расставаться с той, которая была ангелом-хранителем для девочки. Жители села проводили бабушку в последний путь. А перед глазами Ильсияр все стоял тот красивый узорчатый столб, напоминая детство и уроки бабушки.

***9. Семенова Г. М. Ҡитапхана [Рукопись] / Г. М. Семенова. - Каран : Каранская б-ка, 2017. - 2 б.***

## *Китапхана*



Борон - борон заманда йәшәгән, ти әбей менән бабай. Уларҙың булған бик аҡыллы, тәртипле, бик зирәк, эшһөйәр өç улдары булған, ти. Бабай бер көнде балаларын йыйып : «Уландарым, беҙ ҡартайҙыҡ инде, донья хәлдәрен белеп булмай, ошо серле һандыҡ эсендәге васиятнәмәләрҙе тапшырырға ваҡыт», - тигән. Өлкән улына: «Мин ғүмерем буйы мәргән уҡсы булдым, һунарға йөрөргә яраттым», - тип, һандыҡтан алып, уҡ - һаҙаҡ бүләк иткән.

Уртансы улына: «Мин бала саҡтан өҙҙөрөп ҡурайҙа уйнаным, был ҡомартҡы бүләкте һиңә тапшырам», - тип, ҡурай бүләк иткән. Иң бәләкәй улына: «Мин ғүмерем буйы уҡырға, белемгә ынтылдым. Улым һин бик зирәкһең, белем донъяһын ас, кешеләрҙе наҙанлыҡтан ҡотҡар», - тип, ҡаурый ҡәләм бүләк иткән.

Шулай итеп әбей менән бабайҙың үҫеп еткәс, улдары ниндәй һөнәргә эйә булғандар? Өлкән улы кем булған? - Һунарсы. Уртансы улы кем булған ? - Ҡурайсы. Бәләкәй улы кем булған? Яҙыусы. Эйе, Яҙыусы, ул шиғырҙар, хикәйәләр, әкиәттәр ижад иткән, уға ҡушылып башҡа яҙыусылар ҙа китап яҙғандар. Бик ҡүп китап баҫтырып сығарғандар.

Ул китаптарҙы, балалар, өлкән кешеләр алып уҡыһындар өсөн, китап йорто төҙөгәндәр.

Был йортто - Китапхана тип атайҙар, сөнки унда төрлө - төрлө, сағыу, матур китаптар йәшәй. Китап уҡыған кеше - бәхетле кеше!

## *Библиотека*

Жили-были дед да баба. Было у них три сына - прилежные, трудолюбивые, смышленые. Однажды дед собрал возле себя сыновей и заявил: «Дети, мы уже состарились, пришла пора познакомить вас с заветным, что содержится в этом таинственном сундучке».

Старшему сыну он сказал: «Я всегда любил охоту, был метким стрелком», - достал из сундучка стрелу и подал ему.

Среднему сыну он подарил курай: «В молодости я очень хорошо играл на курае, пусть он перейдет к тебе», - сказал он.

Младшему сыну он подарил перо: «Я всегда стремился к знаниям. Ты очень сообразительный, избавь людей от невежества», - говорил дед.

Выросли сыновья. Кем же они стали? Старший сын стал охотником, средний – кураистом, а младший – писателем. Он писал стихи, рассказы, сказки. Остальные тоже последовали за ним – выпускали книги. Много было напечатано книг. А для того, чтобы с этими книгами знакомились и стар, и млад, построили Библиотеку. Там живут разные яркие, красивые книги. Тот, кто любит книги – счастливый человек!



*10. Семенова Г. М. Һары май көҙрәте  [Рукопись] / Г. М. Семенова. - Каран : Каранская б-ка, 2017. - 7 б.*

## *Һары май көҙрәте*

Хикәйә

Мөхәммәт таң һыҙылғанда,  ҡаты ауырыған әсәһенең ыңғырашыуына уянды. Төн буйы ҡоторөан буран әле баҫылмаған. Әсәһенә сәй эсереп, яғылмаған мейестән килгән  һалҡынға дерелдәп,  үҙе лә йылы юрған аҫтына боҫто. Эттәр өргән тауыштар ишетелә. Ул урынынан тороп, урындыҡта йоҡлаған ҡустылары аша апаһын ҡулы менән еҙләне. Бәләкәй генә өйҙә көндәр буйы туғандарына күҙ-ҡолаҡ булып, ауырыу әсәһен тәрбиәләгән ҡыҙ, таңға табан татлы йоҡоға киткән, күрәһең.

-Апай! Апай, тор! Һуңлайбыҙ, - Мөхәммәт апаһына өндәште.

Һыҙланыу, өҙлөкһөҙ йүтәлләүҙән йонсоған әсәләре, әллә уянды, әллә йоҡламай ятҡан:

- Балаҡайҙарым, буран төне буйы ҡоторҙо. Нисек кенә йөрөп ҡайтырһығыҙ инде, - тине әрнеүле тауыш менән. Изге йөрәкле әсә, хәле булмаһа ла, таңға балаларым йылы сәй эсеп китер тип, сәйнүкте көлдөксәләге ҡуҙға күмгән, уты һүнһә лә, эҫе көлдө уның һыуы ҡайнар ине. Берәр шаҡмаҡ шәкәр  ҡушып, сәй эскәс, дүрт мөйөштән өргән һалҡын сигенгәндәй, тән буйлап йылылыҡ йүгергәндәй булды. Кистән мейесте уратып киптерергә ҡуйған кейемде кейгәс, Мөхәммәт ирҙәрсә олпатланып киткәндәй булды. Йәш булһа ла, ирҙәрсә хәстәрлек менән имәндән эшләгән бәләкәй санаһын оҙон юлға әҙерләне:

- Атайым был сананы алты  балаһы Ташөйгән  тауында шыуыр тип яһағайны ла бит, һуғыш башланыр, фронтҡа китермен, балаларым йыраҡ араларҙан нужа сигеп, картуф һәм башҡа кәрәк - яраҡ ташыуын һис уйламағандыр инде, - тип ололарса һөйләнеп алды. Әсәһенең хәлһеҙ тауышы ишетелде, ул һаман балаларын хәстәрләне:

- Улым, соланда май һеңдерелгән торонбаш әҙер, онотоп ҡуймағыҙ.

Иҫән - һау ғына йөрөп ҡайтығыҙ, - тип белгән доғаларын уҡып ирекһеҙҙән аҡҡан күҙ йәштәрен һөртә - һөртә, балаларына аҡюл теләп, оҙатып ҡалды.



Береһенән - береһе бәләкәй туғандары ҡаранғы өйҙә бер ни белмәй йоҡлай.

Тышта иһә төн буйы ҡоторған буран юлды шундай оҫта итеп һылаған. Һыҙылып таң ата, ауыл йорттарының һалам башы бай ҡыҙҙары кейгән эшләпәгәоҡшап ҡалған.

Ҡайһы берҙәре бигерәк мәҙәк булып күренә, ныҡлабыраҡ ҡараһаң, төрлө һынға оҡшаған. Тынлыҡты эт өргән, алыҫтағы тау яғынан бүре олоған тауыш боҙа. Йорттарҙың тәҙрәһендә ут күренмәй, кем шәм яндырып ултырһын инде,ҡайһы берәүҙәренең мөрйәһенән саҡ - саҡ күренгән төтөн, төлкө ҡойроғо кеүек иркәләнеп, ҡайҙалыр өҫкә күтәрелә. Һәр йортҡа иғтибар итеп атлай торғас, ауылды үтап, оҙон юлға сыҡтылар.

- Исмаһам, әҙерәк ай яҡтыһы ла юҡ, бигерәк ҡаранғы, - тип ауыҙ эсенән һөйләнеп, ҡустыһы артынан ашыҡты Нәзифә. Ир бала – ир бала инде. Сабатала аяғы өшөһә лә, апаһына юл ярып, йәлпелдәп сана һөйрәп атлаған була.

Үҫмерҙәрҙең ниәте - егерме биш саҡрымда яҡкан баҙарға барып етеү һәм, ярты күнәк булһа ла, картуф һатып алыу. Балалар яҡты хыялдар донъяһында йөҙөп, һөйләшә - һөйләшә юлдарын дауам итте.

Ҡышҡы юл артыҡ ырамай шул, ҡар йомшаҡ булһа ла, кисеп атларға кәрәк, етмәһә, Нәзифәне алдағы, «Мүкле күл» - соҡорон нисек

үтәсәктәре борсой. Апаһының уйын һиҙгәндәй, Мөхәммәт һиҫкәнеп ҡуйҙы, был яман соҡор тураһында ысынбарлыҡты үҙ күҙҙәре менән күргәне, имеш - мимештәрҙе ишеткәне бар.

- Ҡуй инде кеше соҡорҙан ҡурҡамы ни, Алла бойорһа, һуғыш бөтөп, атайымдар һуғыштан ҡайтҡас, уның аша күпер һалыр әле, ибет!? - тип, хәүеф ҡоршауы тигән нәмә үҙенең дә күңелен нығыраҡ биләй барһа ла, апаһын йыуатҡан булды. Ике яҡтан ҡара урман, сатлама ҡышҡы һалҡында ла батҡағы әйләнеп туңмай ятҡан шомло тәрән соҡорло урын юлбаҫарҙар өсөн бик уңайлы, борон - борондан, һуғыш ваҡытында ошонан үткәндәрҙең барлы - юҡлы әйберен талау, ҡатын -ҡыҙҙы мәсхәрә итеү тиһеңме, хатта бер телем икмәк өсөн кеше ғүмерен ҡыйған урын булараҡ яманаты сыҡҡан уның. Шунлыҡтан, ысынбарлыҡҡа байтаҡ имеш - мимештәр уралып, өҫтәлеп, төндә түгел, көндөҙ ҙә ҡурҡыныс соҡорға әйләнгән. Бик ҡыйынлыҡ менән үттеләр был урынды, сабаталар бысранды, еүешләнде, сана табанына йәбешкән батҡаҡ уҡмашып ҡатты.

- Бына яман соҡорҙо ла имен сыҡтыҡ, - тине, өшөгән бит алмаһын шәл осо менән ыуып, йөрәге нимәлер һиҙенгәндәй Нәзифә. Алда сираттағы ҡаршылыҡ – бейек тау. Үҫмерҙәр көстәрен сарыф итмәҫ өсөн, өҙөп - өҙөп кенә һөйләшә:

- Ҡасан барып етәбеҙ баҙарға? Алда тағы бер тау бар. Уға күтәрелеүе еңелдән булмаҫ, апай! Арыған, еүешләнгән



аяҡ бармаҡтары, ҡалыпҡа һалып һуҡҡан кеүек, сабатаға йәбешеп туңды, аяҡтар һыҙлай. Эстә ас бүреләр олой.

«Ни өсөн беҙҙе шул тиклем һынай яҙмыш?» - тип Нәзифәнең бөтә тирә - яҡҡа яңғыратып ҡысҡырып илағыһы килде. Әммә эстән генә:

- Их, ауыҙҙы бер тултырып икмәк тәмен тойоп, йөрәк аша үткәреп, рәхәтләнеп туйғансы икмәк ашаһаң ине. Ҡәһәрле һуғыш тиҙерәк бөтһөн, атайым иҫән - һау әйләнеп ҡайтһын, әсәйем дә һауыҡһын ине, - тип уйға сумды. Тау башына күтәрелгән һайын әсе йөҙ урындан ямалған йоҡа кейем аша һөйәккә үтеп, тәнде ҡапшағандай тойола. Ҡурҡыу, асығыу, донъяға асыу - бергә үрелгән мәл. Ниндәйҙер хәүеф көтөп тирә - яғына ҡарап барған ҡыҙ:

- Ҡустым, ҡустым! - тине хәле бөтөп, - алда нимәлер бар, ялт-йолт иткәндәй тойолдо. Мөхәммәт ололарса тыныс тауыш менән:

- Бүреләр, - тине, үҙе лә аңламай, - шул йыртҡыстар осрамаһа ярар ине, тип уйлап ҡына килә инем. Нәзифә ҡысҡырып илай башланы. Был тауышты ишетеп, шатланғандай, яҡында бүре олоп ебәрҙе.

- Уф аллам, бүреләр ашай инде. Мөхәммәт, әйҙә кире боролайыҡ, - тип ялбарҙы ҡыҙ, дер ҡалтырап.

- Апаҡайым, бер бөртөгөм, ҡурҡма, илама. Мин бит беренсегә бүре менән осрашмайым, - Нәзифәне тынысландырырға тырышһа ла, үҙенең дә быуындары ҡалтырай ине.Үҫмер санаһына бәйләп һалынған торонбашты әҙерләне.

- Бүрегә ҡаршы утлы торонбаш менән барайыҡмы, - тип иламһыраны Нәзифә.

- Ҡурҡма, апай, алға атлайбыҙ, әгәр беҙ кире боролһаҡ, улар барыбер беҙҙең арттан киләсәк, - тине Мөхәммәт ҡыйыуланып, - лутсы, алға атлайыҡ. Янып торған күҙҙәргә яҡынлашҡас, Мөхәммәт торонбашты тоҡандырҙы: - Әсәйемә рәхмәт инде. Ул алдан ҡайҙан белде икән?

Шулай итеп, йөрәктәрен устарына тотоп, әммә ҡурҡандарын белдермәй, йыртҡыс эргәһенән күҙенә ҡарап атланы үҫмерҙәр. Юлы тиҙ генә атларлыҡмы - хәл бөттө лә ҡуйҙы. Ҡот осҡос бүре, уларҙың ҡар

кисеп, эргәһенән генә үтеүенә аптырағандай, юл ситендә ҡалды. Бер нисә саҡырым ара киткәс, ҡурҡыуы үтмәгән ҡыҙ, бер аҙ тынысланғандай тойолһа ла, хәҙер инде үҙ-үҙен еңеүенә ышанмай, һыҡтауын дауам итте.

Юл әсәһе һөйләгән әкиәттәге һымаҡ алыс та, ҡурҡыныс, хәүефле лә, баҙар асылғанға тиклем барып етеп, йомоштарын үтәп, урап ҡайтып өлгөрөргә кәрәк. Үсмерҙәр баҙарҙы күргәс, бер аҙ ҡаушап ҡалды, урыҫ телен белмәйҙәр, картуф кәрәклеген нисек аңлатырбыҙ, -тип ҡайғырҙылар. Ниһәйәт, яйын тапты Мөхәммәт, картуф һатып алып, санала туңып ҡуймаһын өсөн, төрөп бәйләп тә һалды. Нәзифәгә баҙар бигерәк ҡыҙыҡ тойолдо. Вәт кеше күп: кемдер кейем һата, кемдер аҙыҡ - түлек, йәшелсәгә лә бай. Их шул тәмле ризыҡтарҙы туйғансы ашап, анау ҡумталарҙағы бер телем генә эник, хөрмә тәмләһәңсе!

Ә ҡурсаҡтар, уйынсыҡтар! Һатыусылар әллә үҙҙәре теккән?! Ошо матур ҡурсаҡ менән бер рәхәтләнеп уйнаһаң ине. «Әсәйем дә теләгән нәмәһен алып ашаһа, һауығып та китер ине», - тип уйланы Нәзифә. Тик һатып алырға аҡса тик картуфлыҡ ҡына шул. Баҙарҙағы мөғжизәле донъяны ҡарап сығып, йомошто йомошлағас, ҡайтыу яғына ыңғайланылар.

Беҙҙән башҡа бер кем дә йөрөмәгән, хатта бер эҙ юҡ, - тип һөйләнде Нәзифә, бурандан һуң ярылып ятҡан эҙҙәренә ҡарап көрһөнөп. Балалар иртәнән бирле бер сынаяҡ сәй менән йөрөй, хәҙер килеп арыу, асығыу, кейем йоҡалығы үзен бик ныҡ һиҙҙерҙе. Өшөүҙән алға эйелгән, арыған апаһына ҡарап, Мөхәммәттең йөрәген йәлләү, ҡыҙғаныу тойғоһо телде.

Аҡ йөҙлө, бөҙрә ҡара сәсле, төҫкә һылыу, ҡустылары өсөн һәр ваҡыт терәк булған апалары уларҙың ғаиләһенең ғорурлығы ла бит.

Апаһына иркәләп: - Ҡараҡайым, бөҙрә сәсем, беҙгә теге тауҙың башына етер өсөн уйһыулыҡ аша, төрлө уйҙарға сумып, атларға ла

атларға кәрәк. Артта ҡалырға тырышма, - тип әйтһә лә, икеһененеҙдә аҙымдары ырамаңы.

-Ниндәй бөтмәҫ – төкәнмәҫ юл булды, юлсылар тиккә генә «Тигеҙ уй» - тип атамағандар күрәһең, был юлды, - тине Нәзифә, ауыр уфтанып. - Их, апай, һиңә уҡыу эләкһә, һис шикһеҙ тәбиғәт фәне уҡытыусыһы булыр инең. Балаларға белем биреп, бәхет донъяһына осорор инең, - тип апаһын ҡанатландырҙы.

-Тауҙан төшкәндә лә, тауға күтәрелгәндә лә, тирә - яғын ике яҡтан да тауҙар уратып алған уйһыулыҡтан ҡасандыр атай - олатайҙарыбыҙ юл һалған. Ошо юл башланып тамамланғансы, уйҙарға сумып атлай ҙа атлайһың, бәлки, шуға ла «Тигеҙ уй» тип атама бирелгәндер, - тине Нәзифә.

Оҙаҡ ҡына һәр кем үҙенсә һөйләшмәй, тыныс уйҙарға бирелеп атланы, бәләкәй сана ла балаларҙың эҙҙәрен тигеҙләп, үҙенсә юл һалды. Килгәндә сана буш булғас, еңел ине, хәҙер тауға күтәрелгән һайын ауырлаша барҙы. Нәзифә:

-Ҡайҙа ҡустым, ярҙам итәйем аҙ мин дә һөрәшәйем инде , - тине. Апаҡайым, алтынҡайым, ашығайыҡ, юғиһә ҡаранғыға ҡалабыҙ, - тине, Мөхәммәт. - Алда беҙҙе «Мүкләнгән соҡор» көтә. Ҡустыһының уйынлы - ысынлы ярым шаяртыулы тауышына, теҙҙәре ҡалтыранһа ла, рәхәтләнеп көлөргә тотондо. Уйһыулыҡтан сыҡкан тауыш, әйтерһең дә, сылтырап аҡкан шишмә сыңлауы ине. «Аллаға шөкөр, тауға күтәрелдек, бүрегә генә ял итергә тимәгән», - тип, санаһын алғараҡ этеп ебәреп, йөк өҫтөнә ултырҙы Мөхәммәт. - Апай, әйҙә ял итеп алайыҡ, ултыр һин дә, - тип бәләкәй сананан апаһына урын бирҙе үҫмер.

- Бында ултырып теге бүрене көтәбеҙме? - тине Нәзифә.

- Юҡ, әҙерәк ял итәйек, хәл бөттө, - Мөхәммәт асығыуын баҫыр өсөн ҡуш услап ҡар ҡапты. Һыр бирмәй килгән ҡыҙ, шуны ғына көткәндәй, ҡустыһы янына ултырҙы, шул саҡ ҡулы саналағы төйөнсәккә тейҙе.

-Мөхәммәт, бында нимәул? - тип аптырап һораны, - әсәйем санаға нимәлер һалған, ахрыһы. Нәзифә ҡабаланып хәлһеҙләнгән, бер аҙ өшөгән бармаҡтары менән төйөнсөктө систе. Төҫө уңған яулыҡтан әсәләре еҫе килә, ә эсендә бер киҫәк һары май ята. Мөхәммәт ҡәҙерләп майҙы усында өйөрөлттө, һалҡында уныһы ҡыртлап икегә бүленде. Ҙурыраҡ киҫәген апаһына һоноп:

«Тел аҫтыңа һал», - тине. Әсәләре үҙе ашамай, балаларына һалған был ризыҡ тәнге сихәт көс өҫтәгәндәй тойолдо. Ярмаланып торған һары майҙы һура - һура ауылға ҡарай атланы балалар.

Юл да яҡынайған, көс тә өҫтәлгәндәй тойолдо. Бына ниндәй ҡөҙрәткә эйә икән май айы үләненән эшләнгән һары май. Ауылға килеп ингәндә, йорттарҙа ут юҡ, тик уларҙың йортонда ғына, янған шәм яҡтыһы күҙгә салынды. Бында уларҙы түҙемһеҙләнеп көткән әсәләре һәм ҡустылары ҡосаҡлап алды. Үҫмерҙәрҙең тирләгән кейемдәрен ап - аҡ боҫ күтәрелә, сабаталары шыҡырайып туңған, ә санала оло байлыҡ - бер күнәк ваҡ ҡына картуф ята ине.



*11. Семенова Г. М. Илгиҙәр ҡарт төшө [Рукопись] / Г. М. Семенова. - Каран : Каранская б-ка, 2017. – 3 б.*

## *Илгиҙәр ҡарт төшө*

( ижад донъяһында)

Илгиҙәр ҡарт йөрөп килергә уйланы. Ҡоштар моңон тынлай - тынлай байтаҡ юл үтте. Ҡарт таныш булмаған тау башына еңеллек менән күтерелде. Менеп еткәс, ҡулын маңлайына ҡуйып, тирә - яҡты күҙәтте, ултырып доға ҡылды. Ял итеп алыу теләге менән ситектәрен систе, аяғын һуҙып ергә ултырҙы, йәмле йәйҙең иркә еле әле аяҡ бармаҡтарын, әле бабайҙың һаҡалын ҡытыҡланы. Хәл алғандай булғас, юлын дауам итте.

Тирә-яғын күлдәр уратып алған бик матур ауылға килеп еткәндә ҡояш тау артына йәшеренергә йыйынғайны инде. Халып геү килеп, көтөү ҡаршылай. Өҫтенә аҡ сәкмән кейгән, башына сәллә ураған юлсы һәр бер кешенең иғтибарын үҙенә йәлеп итте. Ҡатын - ҡыҙ йәшел үлән ашап туйынып ҡайтҡан һыйырҙарын һауырға ашыҡты. Киске көндәлек эш тамамланғас, ҙур ғаиләле өйҙәр йәшел үлән өҫтөнә зауыҡлы итеп һуғылған аҫалы балаҫ өҫтөнә ашъяулыҡ түшәп, киске табынға йыйылды.

Вәлиулла ҡатыны Ғөлғәйшә ҡойоп биргән сәйгә генә үрелгәйне генә ҡапҡанан бәләкәй кәүҙәле, аҡ сәкмәнле, сәлләле кешенең инеп килгәнен күрҙе.

- Әссәләмәғәләйкүм! Бирәм ҡайнар сәләм! Һеҙҙән миңә насип булһын вәғәләйкум - әссәләм! - тип сәләмләне Илгиҙәр.

- Вәғәләйкүм - әссәләм! - тип яуап бирҙе хужа. Бабай, түрҙән үтегеҙ, маҡтап йөрөйһөгеҙ, изге кешенең ризығы һәр ваҡыт алдан йөрөй, тиҙәр, әйҙәгеҙ, бергәләп сәй эсәйек, - тип, Ғөлғәйшә бабай алдына ҡайнар сәй ҡуйҙы.

- Рәхмәт,  балалар. Бик һуңға ҡалдым, әгәр рөхсәт итәһегеҙ, ҡунырға ла ҡалыр инем, -  тине юлсы. Хужабикә, әлбиттә, ҡарттың  ҡайһы яҡтан,  кем булыуын, ниндәй йомош  менән килеп сығыуы   менән ҡыҙыҡһынды.

- Мин, ҡыҙым, Аллаһы тәғәлә бәндәһе. Үҙемде белә -  белгәндән  япа - яңғыҙмын. Тыуғандан  бирле  ил  гиҙәм,  шуның өсөн дә  мине, бәләкәй сағымда Бәләкәс  тип йөрөтһәләр, олпатланғас Илгиҙәр ҡарт, тип әйтәләр, -тине лә, үҙ-үҙенә йомолоп ҡалды.  Бер аҙҙан: - Ҡыҙым, мин  һеҙҙе  артыҡ борсомайым. Ошонда йәшел үлән өҫтөнә генә урын йәй, йондоҙҙар менән һөйләшеп ятырмын, - тип өҫтәне.

- Бабай,  өйгә, урындыҡҡа, ҡаҙ мамығынан яһалған түшәккә һалдым,- тине хужабикә уңайһыҙланып. Карт ҡырҡа төштө

- Рәхмәт, ҡыҙым, бында ла бик  яҡшы, - тип күк йөҙөнә текләне.
Ауылды төнге тынлыҡ баҫты. Ялан кәртәләге һыйырҙар, һарыҡтар ял итергә ятты, тик бейә генә баҫҡан ерендә мырт - мырт итеп көйшәй бирҙе. Йән эйәләре барыһы ла татлы йоҡоға талды.

Таң беленер беленмәҫтән һыйыр  һауырға сыҡҡан Ғөлғәйшәне Илгиҙәр ҡарт хафаланып ҡаршы алды:



- Күккә олғашып торған бынау мәһабәт тау бөгөн төшемә инеп, бик шомландырҙы әле. Ниндәйҙер хәүеф халҡында иҫкәрткән кеүек, -  тине ул күҙен  төрлө ағастарға,  бигерәк тә имән ағасына бай тауҙан алмай ғына.

- Был  мөһәбәт  тауҙы  Имәнле

тау, тип  атар инем. Хужабикә ҡапыл һүҙгә ҡушылды: - Урындағы халыҡ уны көнгә бағып ятҡан өсөн Көнгәк тип йөрөтә.

- Эйе, ҡыҙым, был тау заманында бик күп батырҙарҙы үҙенә һыйындырған,  үҫтергән.

- Бөгөн төшемдә тауҙың тигеҙ уйһыулыҡтар башланған ерен  ут ҡапланы ла,  ҡара күмергә әйләнде. Ағиҙел яҡлап  ятҡан бер өлөшө инде янып бөттө тигәндә, шунан йәшенле ҡойма ямғыр яуа башланғас  ялҡын һүнде. Төштөң аҙағында ҡара ҡоромға әйләнгән тау яңынан йәшәрҙе, - тине бабай,  Көнгәк тауына бик һынаулы ҡараш ташлап. Хәйерлегә юраһалар ҙа,  төш ауышҡас та, уның нимә аңлатҡаны билдәле булды: бер һыбайлы урам буйлап һуғыш башланғаны тураһында ҡысҡырып үтте. Киске табынға йыйылғас, Илгиҙәр  ҡарт һүҙ башланы:

- Ярмандар  илебеҙгә баҫып  инде, һуғыш бик оҙаҡ дауам итәсәк, әммә беҙҙең  ил  барыбер  еңер.  Тик  кеше ғумерҙәрен генә кире ҡайтарып булмаясаҡ. Уларҙың исемдәрен  онотмағыҙ, һәр ваҡыт яҡты хәтирә итеп һаҡлағыҙ. Тыныс тормош өсөн үҙенең йәнен аямаған кешеләрҙең иҫтәлеген мәңгеләштерегеҙ, - тип,  ауыл халҡы менән хушлашты ла ауылдан сығып китте.  Хызыр  Ильяс  булғанмы ул, әллә әүлиәме ?

Илгиҙәр ҡарттың күҙаллауы  дөрөҫ булды.  Көтмәгәндә башланған һуғыш дүрт йылға һуҙылды, яу ҡырында күптәр башын  һалды,  хәбәрһеҙ юғалды,  әммә еребеҙҙе дошманға бирмәне.  Ҡара ҡоромға әйләнгән ҡалалар тергеҙелде, тән яралары уңалды. Тик йән йәрәхәте һыҙлай әле.

12. ***Семенова Г. Милли үҙаң уятыү - тәрбиә асылы [Текст]***
***/ Г. Семенова***
***// Көнгәк. - 2017. - 16 ноябр. - Б. 8.***

13. ***Семенова Г. Биҙәкле бағана [Текст]***
***/ Г. Семенова***
***// Көнгәк. - 2012. - 4 октябр. - Б. 3.***

14. ***Семенова Г. Ер - әсә һәм уның ҡыҙҙары [Текст]***
***/ Г. Семенова***
***// Көнгәк. - 2010. - 16 ғинуар. - Б. 2.***

15. ***Булатова Ә. Изге йола тергеҙелә [Текст]***
***/ Ә. Булатова***
***// Көнгәк. - 2010. - 30 ноябр. - Б. 2.***

16. ***Семенова Г. Сихри йомгаҡ [Текст]***
***/ Г. Семенова***
***// Көнгәк. - 2011. - 14 ноябр. - Б. 2.***

17. ***Семенова Г. Имән сәтләүеге [Текст]***
***/ Г. Семенова***
***// Көнгәк. - 2014. - 16 май. - Б. 4.***

18. ***Семенова Г. Айгөл менән себеш [Текст]***
***/ Г. Семенова***
***// Көнгәк. 2010. 25ноябр. - Б. 5.***

19. ***Семенова Г. Балан ҡағы [Текст]***
***/ Г. Семенова***
***// Көнгәк. - 2011. - 27 ғинуар. - Б. 5.***

20. ***Семенова Г. Илғиҙәр ҡарт төшө [Текст]***
***/ Г. Семенова***
***// Көнгәк. - 2017. - 24 июнь. - Б. 6.***

21. ***Булатова Ә. Әсәйем, күҙ нурым [Текст]***
***/ Ә. Булатова***
***// Көнгәк. - 2013. - 26 ноябр. - Б. 5.***

*22. Әмирова Ә. Йылы өләшеүсе әсә, нур бөркөүсе ҡатын [Текст]*
*/ Ә. Әмирова*
*// Көнгәк. - 2013. - 7 март. - Б. 5.*

*23. Хоҙайберҙин Р. Ҡуян - малай мажаралары [Текст]*
*/ Р. Хоҙайберҙин*
*// Тамаша. - 2014 - № 2. - Б.60-61.*

*24. Аҡманаева С. Ҡоштар һайрай яҙғы таң йырын [Текст]*
*/ С. Аҡманаева*
*// Көнгәк. - 1996. - 30 май - Б. 4.*

*25. Ҡотлоғильдина Р. Донъя тотҡаһы - ҡатын - ҡыҙ [Текст]*
*/ Р. Ҡотлоғильдина*
*// Көнгәк. - 2003. - 25 ноябр. - Б. 5.*

*26. Семенова Г. Имәндәй нык бул [Текст]*
*/ Г. Семенова*
*// Көнгәк. - 2000. - 1 январ. - Б. 5.*

*27. Семенова Г. Изге һәм мәрхәмәтлеләр [Текст]*
*/ Г. Семенова*
*// Октябрь юлы. - 2001. - 24 май. - Б. 5.*

*28. Семенова Г. Кескәйҙәр тылсымлы геройҙар менән осрашты[Текст]*
*/ Г. Семенова*
*// Көнгәк. - 2012. - 14 январ. - Б. 5.*

*29. Әбдрәжәпова З. Милләт - ара татыулыкты нығытыу йылы [Текст]*
*/ З. Әбдрәжәпова*
*// Көнгәк. - 2010. - 3 март. - Б. 3.*

*30. Семенова Г. Милли рух тәрбиәләйбеҙ [Текст]*
*/ Г. Семенова*
*// Көнгәк. - 2013. - 30 май. - Б. 2.*

*31. Семенова Г. Башкорт телен өйрәнәбеҙ [Текст]*
*/ Г. Семенова*
*// Көнгәк. - 2011. - 8 декабря. - Б. 2.*

*32. Йәнбәк Р. Ихлас күңелле шағир [Текст]*
*/ Р. Йәнбәк*
*// Акбуҙат. - 2001. - № 2. - Б. 6.*

*33.. Хәйретдинов Б. Һоҡландырҙы кескәйҙәр [Текст]*
*/ Б. Хәйретдинов*
*// Йәншишмә. - 2009. - 27 март. - Б. 2.*

*34. Семенова Г. Разукрашенный столб [Текст]*
*/ Г. Семенова.*
*// Оренбург, “Караван - Сарай”. - 2017. - 110 б.*

*35. Семенова Г. Һары май көҙрәте [Текст]*
*/ Г. Семенова*
*// Көнгәк. - 2018. - 13 ғинуар. - Б. 7.*

*36. Семенова Г. Һары май көҙрәте [Текст]*
*/ Г. Семенова*
*// Көнгәк. - 2018. - 16 ғинуар. - Б. 3.*

*37. Семенова Г. Һары май көҙрәте [Текст]*
*/ Г. Семенова*
*// Көнгәк. - 2018. - 23 ғинуар. - Б. 4.*

*38. Семенова Г. Серле йомғаҡ [Текст]*
*/ Г. Семенова*
*// Акбуҙат. - 2018. - № 8. - Б.6.*

*39. Семенова Г. Төлкөнөң ҡуяндан алданғаны [Текст]*
*/ Г. Семенова*
*// Көнгәк. - 2018. - 17 март. - Б. 6.*

*40. Семенова Г. Куян күстәнәсе [Текст]*
*/ Г. Семенова*
*// Көнгәк. - 2018. - 1 май. - Б. 7.*

*41. Семенова Г. Аманатаҡа тоғролоҡ [Текст]*
*/ Г. Семенова*
*// Көнгәк. - 2018. - 10 июля. - Б. 4.*

**Содержание:**


*1. Семенова (Шарипова)*

*Гульнур Мархамитдиновна* 4

*2. Жизненый и творческий путь* 5

*3. Сказки и рассказы* 12

*4. Ер әсә һәм уның ҡыҙҙары* 12

*5. Матушка земля* 14

*6. Серле йомғаҡ* 16

*7. Волшебный клубок* 17

*8. Айгөл менән себеш* 18

*9. Айгуль и цыпленок* 19

*10. Балан ҡағы* 20

*11. Пастила из калины* 21

*12. Имән сәтләүеге* 22

*13. Дуб-батыр* 24

*14. Биҙәкле бағана* 27

*15. Разукрашенный столб* 35

*16. Китапхана* 40

*17. Библиотека* 41

*18. Һары май ҡөҙрәте* 42

*19. Илгиҙәр ҡарт төшө* 49

*20. Что можно почитать* 52